ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

13-19 ИЮНЬ (һөтәй)

2015

№24 (650)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Рәсәй ғалимдары баһаланы…

4

Аҫабалыҡ һәр саҡ һаҡланған,

йәки Өфө ҡәлғәһе тарихы буйынса тағы бер сығанаҡ

7

Бал ҡорттары…

бал ғына түгел, һабаҡтар ҙа бирә кешегә

8-9

Башҡорт телен…

интернет донъяһында танытыусы

11

ТВ-программа 14

Венеция сауҙагәрҙәре Франческо һәм Доменико Пициганиларҙың 1367 йылда төҙөгән тәүге портолан карталары Парма ҡалаһы китапханаһында һаҡлана. Унда Pascerty (Паскерти) ҡалаһы күрһәтелгән һәм унан көнсығыштараҡ Pascherty (Пашерти) атамаһы менән башҡорттар йәшәгән ерҙәр билдәләнгән. Картограф Авраам Крескес Арагон короле Педро III ҡушыуы буйынса 1375-1377 йылдарҙа һигеҙ картанан торған атлас төҙөй. Һуңынан ул карталар донъяның Каталон атласы (Tabula Catalona, Catalon Atlas) тип йөрөтөлә башлай. Хәҙер ул Париждың Милли китапханаһында һаҡлана. Ул картала ла Кама йылғаһының һул яҡ ярында Pascherti (хәҙерге Өфө урынында) ҡалаһы күрһәтелгән.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Өфө калаһы ни өсөн матур, йәки ул кайһы яҡы менән күңелегеҙҙе арбай?

Рөстәм НУРЫЕВ, Башҡортса Википедия идарәһе: Өфө ҡалаһы миңә һөнәри белем биргән һәм хеҙмәт юлына сығарған ҡала булараҡ, күңелемә бик тә яҡын. Күп йылдар баш ҡалала йәшәү осоромда шуға төшөндөм: миңә Өфөлә йәшәүе оҡшай, миңә бында яҡшы һәм уңайлы. Әгәр ошо урында мин ҡаланың инфраструктураһы, архитектура йәһәтенән төҙөлөшө, урамдары, парктары, театр һәм музейҙары хаҡында һөйләй башлаһам, был, асылда, Өфө тураһында түгел, ә теләһә ниндәй башҡа берәй ҡала хаҡында бәйән итеү менән бер булыр ине, сөнки тышҡы билдәләр буйынса барлыҡ ҡалалар ҙа бер-береһенә оҡшаш. Мин Өфө тураһында йылылыҡ хисе, тулҡынланыу менән һөйләйем икән, уның икенсе бер яғын - эске мөхитен, аураһын күҙҙә тотам. Үҙ ғүремемдә бик күп ҡалаларҙа булырға тура килде, ләкин башҡа бер ерҙә лә мин үҙемде баш ҡаламдағы кеүек яҡшы тоймайым. Мәскәүҙең аураһы, мәҫәлән, бик ауыр, унан минең тиҙерәк ҡайтып китке килә. Ә бына Санкт-Петербургта, киреһенсә, еңел: ҡаланың дөйөм мәҙәни кимәле үҙенә тартып тора. Халҡы асыҡ, яҡты йөҙлөләр. Ниндәй генә эш менән барма - мәҙәни ял сараларына, музейҙар буйлап экскурсияларға ла йәлеп итеп өлгөрәләр. Шулай ҙа, бая әйтеүемсә, Өфөлә генә күңел тынғыһы табып була кеүек: өйрәнелгән, туған мөхит булғаны өсөн генә түгел. Ҡала хаҡында фекер күп йәһәттән уның халҡына ла бәйле булып сыға. Беҙҙә халыҡ итәғәтле, яғымлы, ярҙамсыл. Башҡорт халҡының ихласлыҡ, эскерһеҙлек һәм ҡунаҡсыллыҡ кеүек сифаттары башҡа халыҡтар күңеленә лә күскән, күрәһең. Юҡҡа ғынамы, Өфө ҡалаһының уйынлы-ысынлы "өс шөрөп" тип тә йөрөтөлгән яңы арт-объекты беҙҙә йәшәгән төп өс милләт халҡын берләштереүсе, дуҫлыҡты нығытыусы символ ролен дә үтәй. Әйткәндәй, был символды нишләптер ҡайһы берәүҙәр оҡшатып бөтөрмәй, ә ул минең күңелгә ятты. Ысынлап та, нығытыу, берләштереү, ҡороу мәғәнәһе һалынған бит уның асылына.

Тамара ТИМОФЕЕВА, матбуғат хеҙмәте ветераны: Өфөлә туып үҫмәһәм дә, баш ҡалабыҙҙа иң оҙаҡ йәшәгән кешеләр иҫәбендәмен, шуға ла күптән тыуған ҡалама әйләнгән ул: 62 йыл хәҙер ошонда төпләнеүемә. Беҙҙең йәшлек замандарынан алып бик ныҡ үҙгәрҙе Өфө. Ул шулай булырға тейеш тә. Әле ҡасан ғына Ғәли ағайығыҙ (Тамара Ивановнаның тормош юлдашы - **Ред.**) менән Черниковка биҫтәһенә йәйәүләп барып етә инек, хәҙер урамға сыҡһаң, аҙашып китмәм, тимә. Күҙ алдында үҫә, күккә олғаша, матурая Өфө - һүҙ ҙә юҡ. Күп нәмә сағыштырыуҙа асыҡлана, тиҙәр. Ысынлап та, Мәскәүҙе лә, Урта Азия ҡалаларын да, ут күршебеҙ Ҡаҙанды ла яҡшы беләм: улар бик матур, милли үҙенсәлеккә эйә ҙур ҡалалар, ләкин Өфөлә, менталитет тип әйтәйемме, бөтөнләй башҡа төрлө. Халыҡ беҙҙә тотанаҡлыраҡ, аңлыраҡ, ихласыраҡ кеүек тойола миңә. Әйтеүемсә, иптәшем менән ҡалабыҙҙы күп тапҡырҙар аркыры-буй иңләп сыҡҡанбыҙ: гел генә йәйәү йөрөргә ярата инек. Миңә бигерәк тә баш ҡаланың ял һәм мәҙәни парктары оҡшай: И. Якутов, Аксаков, М. Ғафури исемдәрен йөрөткән ял үҙәктәре бер ниндәй заман елдәренә ҡарамай, күпме йылдар инде йәшел оазис ролен үтәүен дауам итә. Ғөмүмән, ана шундай "йәшеллек утрауҙары" күберәк булһын ине ҡалала. Хәтерем яңылышмаһа, элегерәк Өфөнө иң йәшел ҡала тип йөрөтәләр ине, хәҙер төҙөлөш кварталдары йәшеллекте баҫып китә башланы. Киреһенсә булһын ине, тип теләйем, сөнки кеше ниндәй генә ҙур таш ҡалаларҙа йәшәмәһен, ул барыбер тәбиғәт балаһы булып ҡалырға тейеш.

(Дауамы 3-сө биттә).

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

Баш ҡалабыҙ Өфө урамдарында милли колорит һәм символдар күренә башлауы шатлыҡлы күренеш. Шуларҙың береһе, әлбиттә, "өс шөрөп" тип йөрөтөлгән "ӨФӨ" бренд-тамғаһы. Былтыр Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Республика Милли китапханаһы алдында был тамғаға арналған стилләштерелгән һәйкәл ҡуйылғайны, быйыл "Мин Өфөнө яратам" тигән скульптура Ленин урамында урын алды. Был тамға баш ҡала халҡының да, килгән ҡунаҡтарҙың да күңеленә хуш килде.

Мораҙым Мөхәмәтов фотоһы.

12+

✓ Зәки Вәлиди Ҡаҙанға уҡырға сығып китер булғас, атаһы ғына түгел, ике хәлле кешеһе уға аҡса бирә. Зәки Вәлиди Ҡаҙандан Болғарға, Әстерханға бара, Мәләкәскә сығып китә. Уға һәр ваҡыт ниндәйҙер кешеләр матди ярҙам күрһәтә.

ИҒТИБАР!

МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

Республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө" гәзитенә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Әле 2015 йылдың икенсе ярты йыллығы тураһында алдан хәстәрләп, "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһына - 539 һум 76 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) 569 һум 76 тингә яҙыла алаһығыҙ.

• Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойоштороlған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

• **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Июндең 20-ләренә тиклем гәзитебеҙҙе яҙҙырып, квитанцияларын редакцияbыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер **Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ"**, **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры"**, **Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, **"Антология поэзии Башкортостана"**, **Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана"**, **башҡортса "Дини календарь"**, **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтәнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

Өфө ҡала округы хакимиәтенең Социаль сәйәсәт идаралығы (начальнигы С.Ф. Ғәлиева) хәбәр итеүенсә, баш ҡала ветерандары "Киске Өфө" гәзитен бушлай алдырырға теләй икән, баш ҡаланың үҙҙәре йәшәгән районындағы халыҡты социаль яҡлау учреждениеларына мөрәжәғәт итә ала. Адрестар: Дим районы ветерандары - Центральный урамы, 18, тел. 281-15-56; Калинин районы ветерандары - Б. Хмельницкий урамы, 53, тел. 263-45-67; Киров районы ветерандары - Менделеев урамы, 136/2, тел. 256-51-06; Ленин районы ветерандары - Ғафури урамы, 103, тел. 251-04-35; Октябрь районы ветерандары - Зорге урамы, 31, тел. 282-55-82; Орджоникидзе районы ветерандары - Б. Хмельницкий урамы, 68/1, тел. 263-81-08; Совет районы ветерандары - Цюрупа урамы, 102, тел. 250-30-38.

Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?

ҮҘЕБЕҘГӘ ҮҘЕБЕҘ...

ярҙам итәйек

Фирҙәүес ХИСАМЕТДИНОВА, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы, профессор: Бөгөн заман икенсе: үҙебеҙҙе үҙебеҙ ҡайғыртмаһаҡ, беҙҙе бер кем дә ҡайғыртмаясаҡ. Балалар тәрбиәләү, уларға туған телебеҙҙе, рухыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе тапшырыу, шуның менән милләтебеҙҙе үҫтереү проблемаларын бары тик үҙебеҙ генә хәл итә алабыҙ. Элек, әйтәйек, илебеҙ, республикабыҙ беҙҙең өсөн шундай эштәр эшләр, етәкселәребеҙ ярҙам итер әле, тип юғарылағыларға баға торғайныҡ. Бөгөн ҡайҙандыр, кемдәндер ярҙам көтөп ултырыр мәл түгел. Сөнки, дөйөм алғанда, илдә иҡтисад яғынан ғына түгел, әхлаҡ һәм башҡа проблемалар яғынан да хәл еңелдән түгел. Был ситуацияла ниндәйҙер бер халыҡты кемдер ҡурсалар, тигәнгә лә ышаныуы ҡыйын. Күптән түгел ил Президенты Владимир Путин, һәр милләт, һәр бер халыҡ үҙ телен, мәҙәниәтен үҫтерергә тейеш, тип телмәр тотто ул. Әле шул йүнәлештә ниндәйҙер эштәр ҙә алып барыла һымаҡ, әммә әйтелгәндәр күп ваҡыт һүҙ кимәлендә генә тороп ҡалыусан. Шуға ла беҙҙең өсөн кемдер хәл итер әле, тип көтмәй, һәр кем үҙенең ғаиләһен, милләтен, халҡын үҙе ҡурсаларға бурыслы, тип һанайым.

Ә ҡурсалау нисегерәк булырға тейеш һәм бының өсөн нимә эшләргә кәрәк? Минең яуабым былай: белемле, һөнәрле, аҡсалы кеше генә бар ҡаршылыҡтарҙы ла еңә, бар проблемаларын да хәл итә, үҙен дә, ата-әсәһен дә, илен дә ҡурсалай ала. Бына, мәҫәлән, беҙҙе бер кем дә, белем алмағыҙ, тип тыя алмай. Тырышһаң - рәхим ит, һәр кем үҙе теләгән уҡыу йортонда уҡый ала. Хатта Сибай йә Өфөлө генә түгел, Мәскәү, Екатеринбург, Новосибирск, Санкт-Петербург ҡалаларында ла белем алырға мөмкин. Мөмкинлеге булғандар сит илгә сығып китеп тә уҡый ала. Был шулай уҡ беҙҙең үҙебеҙҙең ҡулыбыҙҙан килгән эш.

Икенсе мөһим нәмә - һөнәрле булыу. Беҙ эш юҡ, тип зарланырға яратабыҙ. Һөнәре булмаған кеше, әлбиттә, эшһеҙ. Әгәр үҙ һөнәрең буйынса юғары квалификациялы белгес икәнһең, һин эшһеҙ булмаясаҡһың. Етәксе булараҡ әйтәм, хеҙмәткәрҙең йәшенә һәм эшен белеп башҡарыу кимәленә ҡарап эштән ҡыҫҡарталар. Белемле булһаң, үҙеңдең эшеңде яҡшы белһең, һине бер кем дә эштән ебәрә алмай.

Һәм, ниһайәт, өсөнсө талап - аҡсалы булыу. Әлбиттә, башҡортар араһында әллә ниндәй ҙур, бай кешеләр бар, тип әйтә алмайбыҙ. Был, ахыры, элек-электән килгән ярымкүсмә тормошобоҙ менән бәйлеме инде, уныһын әйтеүе ҡыйын. Әммә был бик етди өйрәнеү талап иткән психологик проблема, уның өҫтөндә беҙҙең ғалимдар эшләргә тейеш, тип һанайым. Арабыҙҙа ҙур байлыҡҡа эйә кешеләр әҙ, әммә урта хәлле һәм бер ни тиклем аҡсаға эйә кешеләр бар. Шул кешеләр үҙҙәренең балаларына мөмкинлек бирергә тырыша, уҡыта. Әйтәйек, Мәскәүгә, Питерға, хатта беҙҙең Әбйәлил районынан Өфөгә уҡырға ебәреү өсөн дә аҡсалы булыу кәрәк. Шул аҡсалы булыу ҙа баяғы мин әйткән белем һәм һөнәргә бәйле. Мин ошо арала Зәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр" китабын ҡабаттан уҡып ултырҙым да, шунда беҙгә фәһем алырлыҡ бер фекергә юлыҡтым. Зәки Вәлиди Ҡаҙанға уҡырға сығып китер булғас, атаһы ғына түгел, ауылдың һәм күрше ауылдың ике хәлле кешеһе уға аҡса бирә. Зәки Вәлиди Ҡаҙандан Болғарға, Әстерханға бара, Мәләкәскә сығып китә. Уға һәр ваҡыт ниндәйҙер кешеләр матди ярҙам күрһәтә. Был Зәки Вәлиди менән генә булған хәл түгел - элек беҙҙең халыҡта уҡырға теләгән кешегә ярҙам итеү ғәҙәти күренеш һаналған. Ошо хәтирәләрҙе уҡып ултырғанда, Белорет педагогия училищеһында белем алып йөрөгәндә күрше ауылда йәшәүсе атайымдың һеңлеһенең миңә һәр ваҡыт күстәнәстәр һәм бер һум аҡса биреүе иҫемә төштө. Бына был, халҡыбыҙҙа уҡыған кешегә ярҙам итеү - изге эш, тигән ҡағиҙәнең беҙҙең көндәргә хәтле йәшәгәнлегенә тағы бер миҫал.

Әгәр бөгөн дә һәр кем хәленән килгәнсе кемдер берәүҙең балаһына ярҙам итһә, күптәребеҙ уҡып сығып, кеше булыр ине. Элек бит ауылда балаларға кеше балаһы тип ҡарамағандар, ауылдың ололары һәр баланы тыйған, тәрбиә бирергә тырышҡан, матди яҡтан да ярҙам иткән. Баймаҡ районы Муллаҡай ауылында йәшәүсе Әнүәр мулла иҫән сағында, атайымды ла, мине лә халыҡ аҡсаһына уҡытып сығарҙылар, тип һөйләгәйне. Бөгөнгө көндә йәш кешенең яҙмышында ауыл халҡы ҡатнашмай. Халыҡта хәҙер битарафлыҡ көслө, беҙҙең милләткә хас булмаған әллә ниндәй сифаттар барлыҡҡа килде. Бына шул ят сифаттарҙан арынырға кәрәк беҙгә. Мөмкинлегең бар икән, уҡырға мөмкинлектәре булмағандарға ярҙам итеп, милләттең йәштәрен уҡытырға ярҙам итергә кәрәк. Халҡыбыҙ уҡыһа, беҙ юҡҡа сыҡмабыҙ. Беҙ тик юғары белемле булып, уҡып ҡына донъя кимәленә сыға алабыҙ. Сөнки башҡорт сауҙагәр түгел, эшҡыуарлыҡҡа ла һәләттәребеҙ ҙур түгел, беҙ интеллектуалдар.

Йәш быуын ошо әйткәндәрҙе аңлаһын, аҡсалы кешеләр башҡаларға ла ярҙам итеп, үҙенең өлгөһөнә эйәртһен ине. Шулай уҡ, башҡорт халҡының зыялылары ла үҙенең тыуған ауылына, үҙе уҡыған мәктәпкә ярҙам итеүҙе изге бурыс тип ҡабул итһә, бик яҡшы булыр ине. Сөнки мәктәптәрҙең кимәле күтәрелһә, балаларҙың да уҡырға, шәхес булырға ынтылышы арта, өлгәштәре яҡшыра. Беҙ бына шулай бер-беребеҙгә ярҙам итеп, үҙебеҙҙе күтәреп кенә әҙәм була алабыҙ. Башҡорттан башҡа башҡортҡа ситтән кемдер ярҙам итмәйәсәк икәнен һәр саҡ иҫтә тот, милләттәш.

Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың рәсми делегацияһы 18-20 июндә Санкт-Петербург ҡалаһында үҙғарыласаҡ халыҡ-ара иҡтисади форумда ҡатнашасаҡ. Республика делегацияһын Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов етәкләйәсәк. Форумда донъялағы һәм илебеҙҙәге ҙур компания вәкилдәре менән һөйләшеүҙәр алып барыу күҙаллана. Хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙәр әҙерләнә. Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумы сиктәрендә Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһының Эшлекле форумы үтәсәк.

✓Өфөлә ШОС һәм БРИКС саммиттарын үткәргәндә Конгресс-холл янындағы биләмә ябыла. Был хаҡта "Интерфакс" агентлығында үҙған матбуғат конференцияһында Башҡортостан Республикаһы министры Руслан Мирсаяпов хәбәр итте. Билдәләнеүенсә, 6 июлдән 11-нә тиклем Салауат Юлаев һәйкәленә үтеп булмаясаҡ. Зәки Вәлиди, Пушкин һәм Ғафури урамдарындағы биләмәләр йәмғәт транспорты хәрәкәте өсөн ябыла, әммә кешеләр бер ниндәй сикләүһеҙ өйҙәренә ҡайта аласаҡ.

✓Саммиттар барышында өфөләргә юбилейҙарҙы һәм башҡа тантаналарҙы үткәрмәҫкә тәҡдим ителә. Кортеждарҙы үткәреү өсөн урамдарҙы ябыуға бәйле тәғәйенләнгән урынға барып етеүҙә уңайһыҙлыҡтар тыуыуы мөмкин. Саммиттар ваҡытында Өфө аэропорты штат режимында эшләйәсәк, даими рейстар расписание буйынса осасаҡ. Чартер рейстары 7 июлдән 11-нә тиклем генә туҡтатыла. Ҡала халҡына аэропортҡа йәмғәт транспортында барырға тәҡдим ителә.

✓"Юлдаш" мәғлүмәт һәм йыр-моң каналы икенсе йыл рәттән "Волга буйы федераль округының иң яҡшы радиоһы" тип танылды. Мәскәүҙә Radio Station Awards - 2015 Бөтә Рәсәй конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Быйыл конкурста Рәсәйҙән 150-нән ашыу радиоһы ҡатнашты, бөтәһе 25 номинация билдәләнде. Еңеүселәрҙе тыңлаусылар үҙҙәре асыҡланы. "Юлдаш" радиоһы өсөн 40 меңгә яҡын кеше тауыш бирҙе.

✓Рәсәй көнөн байрам итеүгә бәйле комиссариаттар хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыларҙы армияға оҙатыуҙы туҡтата. 12 июндән 14-нә тиклем бөтә йыйылыу пункттары, шул иҫәптән Башҡортостанда ла, ябыҡ буласаҡ, тип аңлатма бирҙеләр Үҙәк хәрби округының матбуғат хеҙмәтендә. Яҙғы хәрби хеҙмәткә саҡырылыш 1 апрелдә башланды һәм 15 июлдә тамамлана. Үҙәк хәрби округының хәрби комиссариаттары 62 меңдән ашыу егетте армияға оҙатасаҡ.

✓ *Ситтән килеүселәр иң беренсе беҙҙең тарих һәм милли мәҙәниәтебеҙ менән ҡыҙыҡһына. Шуға күрә лә, "Урал батыр" эпосы буйынса Милли парк тибындағы махсус проектты тормошҡа ашырыу мәсьәләһен ҡарарға кәрәктер.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Өфө калаһы ни өсөн матур, йәки ул кайһы яғы менән күңелегеҙҙе арбай?

(Башы 1-се биттә).

Әлфирә МӨХӘМӘТЙӘНОВА, БДУ студенты: Өфө - минең тыуған ҡалам. Бәләкәй саҡта беҙ М. Ғафури исемендәге мәҙәни-ял паркы янында йәшәй инек, шуға ла бала сағым хәтирәләре ундағы йәшеллек, сәскәләр һәм аттракциондар менән бәйләнгән. Парктың һалҡын ғына күләгәле ҡарт урманы бар. Әсәйем мине гел шунда алып сыға ине, шуға күрә бәләкәй генә саҡтан уҡ мин баҙыҡ имәнде, зифа ҡайындарҙы, төп-төҙ шыршы менән ҡарағайҙы, иң киткес матур япраҡлы сағанды, хуш еҫле йүкәне, туҙғаҡ мамыҡлы тирәктәрҙе исемләп-танып белә инем инде. Был ағастарҙың бөтәһе лә әлеге паркта үҫә. Уйлап ҡараһаң, ҡала балаһы өсөн ниндәй бай хазина булған ул парк! Уны мин әле лә рәхмәт тойғоһо менән иҫкә алам. Ул һаман да минең яратҡан урындарҙың береһе булып ҡала. Бынан тыш, мин тағы ла Аксаков паркында, Салауат Юлаев исемендәге баҡсала, Ҡашҡаҙан күле янында, С. Юлаевҡа һәйкәл торған майҙанда йыш булырға яратам. Тик был урындарҙа йәшеллек улай уҡ бай түгел, Урмансылар паркын иҫәпләмәгәндә. Өфө урамдарына килгәндә, шулай уҡ матур урындар күп, әлбиттә, ләкин уларҙың бөтәһендә лә йәйәүләләр өсөн уңайлыҡтар бар, тип әйтеп булмай. Етмәһә, хәҙер йәйәү йөрөргә тротуарға ҡуйылған машиналар менән велосипедсылар ҡамасаулай, үҙенде һәр саҡ көсөргәнештә тоторға тура килә.

БДУ-ла уҡып йөрөүсе ҡытай дуҫтарыма йыш ҡына экскурсовод булырға тура килде быйыл. Пекин, Шанхай кеүек эре мегаполистарҙа булып ҡайтҡандан һуң, миңә Өфө бәләкәй генә булып күренә. Тәүҙә бик борсолдом: ҡытайҙарҙы Өфөлә ни менән аптыратырға була һуң, тип. Эйе, мөһабәт һәйкәлдәрҙе лә күрһәттем, тарихтарын һөйләнем, әлеге парктарҙа ла булдыҡ, тик барыбер уларҙың әллә ни иҫтәре китмәне кеүек тойолдо миңә, әҙәп өсөн генә һоҡландылар, буғай. Ярай әле Милли музейыбыҙ ҡотҡарҙы, бында инде дуҫтар ғәжәпләнеүҙәрен йәшерә алманы. Музейыбыҙҙың бай экспонатлы залдарын сәғәттәр буйы ҡарап йөрөргә лә риза ине улар. Бының менән мин, киттән килеүселәр иң беренсе беҙҙең тарих һәм милли мәҙәниәтебеҙ менән ҡыҙыҡһына, тип әйтергә теләйем. Шуға күрә лә, "Урал батыр" эпосы буйынса Милли парк тибындағы махсус проектты тормошҡа ашырыу мәсьәләһен ҡарарға кәрәктер, тигән фекерҙәмен.

Мәрзиә ҒҮМӘРОВА, йәш белгес: Өфө ҡалаһы һәр башҡорт өсөн рухи үҙәк. Ҡайҙа ғына йәшәмәһен, һәр кем Өфөлә барған ваҡиғалар тураһында хәбәрҙар булғыһы килә, баш ҡалала көн күреүсе зыялыларыбыҙҙың теге йәки был мәсьәләгә ниндәй ҡарашта булыуы менән ҡыҙыҡһына. Республиканан киттә йәшәүсе милләттәштәребеҙ ҙә Өфөгә өмөт менән баға: нисек йәшәй Өфө, унда ниҙәр бар, нигеҙебеҙ ныҡмы әле? Ауылға ҡайтһаң, өлкән йәштәге ағайҙар, шаяртып, Өфө урынындамы, тип һорай ҡала. Йәғни, Өфө урынында торған саҡта милләттең рухы ла ныҡ буласаҡ. Урамдарынан йәйәү бер генә үтһәң дә, күңелең ял итә бит ул Өфөлә. Әлбиттә, Өфө бер кемде лә ҡолас йәйеп ҡаршы алмай, бында үҙеңә үҙең юл ярырға тура килә.

Заманалар үҙгәрһә лә, рухи мәккә булыуҙан туҡтамай Өфө-бөҙ - шуның өсөн дә ул матур беҙҙең өсөн. Баш ҡалала хәҙер башҡорт донъяһы ла ҡайнап тора. Ҡала урамында үҙ-ара башҡортса аралашҡан йәштәрҙе йыш осратаһың, башҡортса саралар ойошторола, милли баҫмаларыбыҙ, туған телдә һөйләп торған радио, телевидениебыҙ бар. Остаздар, дуҫтар, фекерҙәштәр бында. Өфө тураһында һөйләгәндә, күптәребеҙ уны мәҙәни һәм рухи үҙәк, тип билдәләр ине. Юғары профессионаллеге менән таң ҡалдырған милли театрҙарыбыҙ бында ижад итә. Һуңғы мәлдә халыҡ-ара кимәлдәге фестивалдәр йыш үтә, килгән ҡунаҡтар ҙа Өфөбөҙгә хайран ҡала. Донъялағы бүтән мегаполистар кеүек үк, Өфө етеҙ хәрәкәткә көйләнгән ҡала. Ҡайһы берҙә ошо тиҙлектән, сәйәси, мәҙәни ығы-зығынан арып киткән мәлдәр ҙә була, тик баш ҡаланан ике-өс көнгә генә ситкә китһең дә, уны һағына һалаһың. Ҡаланан бигерәк, ҡалалағы ошо мөхиттe һағынаһың.

Ҡаланың эске йөҙө генә түгел, тышы ла матур, ҙур-ҙур төҙөлөштәр бара. Былтыр Өфө Рәсәйҙең иң төҙөк 20 ҡалаһы исемлегенә лә инде. Шулай ҙа ҡалабыҙҙың үҙенә генә хас милли йөҙө барлыҡҡа килһен ине, тип тә теләйбеҙ, сөнки бер күҙ һирпеү менән уның Башҡортостандың баш ҡалаһы икәне аңлашылып торорға тейеш бит. Юҡһа, киттән килгән ҡунаҡтарҙы Салауат Юлаев һәйкәленән башҡа урынға алып барып та булмай.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

КҮҢЕЛДЕ ЯУЛАҒАН БАҪМА

Ваҡытында ҡосаҡ тултырып гәзит-журналдар алдырҙым, сөнки уларҙы уҡырға теләк тә, яҙҙырырға мөмкинлек тә булды. Хәҙер өйөмә килгән район гәзите, бер журнал һәм "Киске Өфө" ваҡытлы матбуғат сараларына булған ихтыяжыма тулыһынса яуап бирә. Район гәзите аша үҙебеҙҙең төбәккә ҡағылған яңылыҡтар менән танышам, ә журналда яңы әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡыйым. "Киске Өфө" иһә күңелемә, зауығыма, ҡыҙыҡһыныуҙарыма тура килгән, уйланырға фекер ташлаған, дөрөҫлөккә, яҡшылыҡҡа, иманға илткән мәҡәләләре менән күптән күңелем түрен яулаған яратҡан баҫмам.

Гәзиттең күптән һәм уңышлы баҫылып килгән "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһы тураһында булыр тәүге һүҙем. Баҫма хеҙмәткәрҙәренең нәҡ бөгөнгө көндә актуаль темаларҙы табыу һәләтен, тиҙ арала күтәреп сыға торған мәсьәләләрҙе халыҡ иғтибарына сығарыуын, улар хаҡында етәкселәр ҡолағына төшөрөүен билдәләп үтмәйенсә булмай. Теге йәки был һорауға яуап эҙләгәндә республикала ғына түгел, хатта сит өлкәлә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе лә йәлеп итеүе менән ота гәзит, сөнки уларҙы республика халҡы менән бәйләнешкә индерә. Шулай уҡ үҙ биттәрендә төрлө быуын кешеләренә үҙ фекерен әйтергә мөмкинлек биреүе лә оло ихтирамға лайыҡ.

Кеше һәр ваҡыт уйҙар донъяһында гиҙә һәм улар араһында күңелде өйкәп торғандары ла, шатландырғандары ла, ҡаты уйға халғандары ла бихисап. Әгәр ҙә уйҙарыңдың осона сыға алмайынса, фекер тарҡаулығы кисереп, теге йәки был мәсьәлә буйынса ҡәтғи генә ҡарарға килә алмай йөрөһәң, "Киске Өфө"нө уҡып сығыу етә - барыһы ла үҙ урынына ултыра. Бөгөнгө телевидение һәм радиола яңғыраған, башҡа бик күп матбуғат сараларындағы "ҡара" мәғлүмәт йәмғиәтте үрмәксе ауы шикелле ялмап, тын алырға ҡамасаулай, әхлаҡи яҡтан баҫа. Ә "Киске Өфө" битендә сығыш яһағандарҙың һәр һүҙе тик ыңғай тойғолар менән һуғарылыуы, оптимистик рухта булыуы беҙҙе, гәзит уҡыусыларын да, ыңғай энергетика менән тулыландыра.

Сәсәндәр әйтеше яңынан башланыуға сикһеҙ шатмын. Арабыҙҙа ошондай мәғлүмәтле, йор һүҙле, аҡыллы һәм һәләтле сәсәндәр бар икән, бер ҡасан да халҡым теле бөтмәйәсәк. Уларҙың үҙ милләте өсөн янып-көйөүе әйтештең һәр юлында ярылып ята, уны уҡыған үҙемдә илһөйәрлек тойғоһоноң тағы ла көсәйеүен тоям. Миңә һәм башҡа гәзит уҡыусыларға ошондай матур кисерештәр бүләк итеүе, беҙгә халҡыбыҙ араһындағы аҫыл таштарҙы - сәсәндәрҙе күрһәтеүе һәм уларҙы ишетергә мөмкинлек биреүе "Киске Өфө"нөң бәҫен тағы ла нығыраҡ арттырҙы.

Тарихҡа күп урын бүлеүе менән дә гәзит күпселек республика ваҡытлы матбуғат сараларының танауына сиртә. "Киске Өфө"лә бирелгән тарихи мәҡәләләрҙе уҡып, байтаҡ мәғлүмәти белемгә эйә булдым. Мәктәптә был тарихи факттар тураһында ләм-мим, тарих өлкәһендә эшләгән белгес булмағас, ҡайҙалыр махсус барып өйрәнеп ултырып булмай, шуға күрә гәзиттең был йәһәттән алып барған эшмәкәрлеге баһалап бөткөһөҙ. Артабан да тарихыбыҙҙы белергә, тимәк, булмышыбыҙҙы нығыраҡ аңларға ярҙам иткән мәҡәләләр даими баҫылып торор, тигән ышаныстамын.

Фәнил ҠАСҠЫНБАЕВ.
Архангел районы.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓19 июндә Күгәрсен районының Мораҙым тарлауығында республика журналистары фестивале ойоштороla. "Журфест" һөнәри байрамы республиканың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре көнө уңайынан уҙғарыла. Быйыл байрам программаһы Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС илдәре саммиттарына арнала. Фестивалде асыу тантанаһы иртәнге сәғәт 11-ҙә башлана.

✓Швейцарияла фехтование буйынса Европа чемпионаты дауам итә. Рапирасылар араһында команда ярыштары үтте. Башҡортостан спортсылары Артур Әхмәтхужин, Реналь Ғәниев рәсәйҙәр Дмитрий Ригин, Алексей Черемисинов менән бергә көмөш миҙалға лайыҡ булды.

✓Өфөлә "Вакцинация - сәләмәт милләт" бөтә Рәсәй кампанияһы мәғлүмәт марафоны бара. Уның төп маҡсаты - иҫкәртеү мәсьәләләрендә киң мәғлүмәт сараларының һәм халыҡтың грамоталылығын арттырыу. Проекттың Өфөләге презентацияһына Волга буйы федераль округының киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре килде. Сеченов исемендәге Мәскәү дәүләт медицина университеты доценты Роман Полибин билдәләүенсә, донъяла вакцина ярҙамында иҫкәртеүгә 220 йыл үткән һәм ошо заманса ысул һөҙөмтәһендә миллиондарса кешенең ғүмере ҡотҡарып ҡалына.

✓Быйыл Башҡортостанда 710 меңдән ашыу кеше диспансеризация үтәсәк. Республикала халыҡты ҡабул итеү өсөн 93 учреждение һайлап алынған, 32 күсмә медицина бригадалары ойоштороlған, 13 күсмә медицина комплексы йәлеп ителгән. Һәр кеше 21 йәштән алып өс йылға бер тапҡыр диспансеризация үтә ала. Быйыл 1994, 1991, 1988, 1985, 1982, 1979, 1976, 1973, 1970, 1967, 1964, 1961, 1958, 1955, 1952, 1949, 1946, 1943, 1940, 1937, 1934, 1931, 1928, 1925, 1922, 1919, 1916 йылдарҙа тыуған граждандар тикшерелергә тейеш.

✓Башҡортостан спортсылары Баҡыла тәүге Европа уйындарында сығыш яһай. Европанан 6 меңдән ашыу спортсы ҡатнашасаҡ ярыштар 12 июндән 28-нә тиклем уҙғарыла. Рәсәйҙең йыйылма командаһы составына Башҡортостан спортсылары Тимур Сафин, Тимур Арыҫланов, Аделина Заһиҙуллина, Анастасия Иванова (фехтование), Полина Егорова (йөҙөү), Илья Первухин (каноэла ишеү), Александр Парасюк (дзюдо, һуҡырҙар спорты) индерелгән.

“Башинформ”дан.

✓ *"Ете ҡыҙ" фонтаны башҡорт халыҡ легендаһы буйынса эшләнә. Унда төп образ булып милли кейемдәге ҡыҙҙар һыны торасаҡ. Фонтан эргәһендә экран урынлаштырылып, унда "Ете ҡыҙ" бейеүе трансляцияланасаҡ.*

МАТУР ХӘБӘР!

РӘСӘЙ ҒАЛИМДАРЫ БАҺАЛАНЫ...

Башҡорт ырыуҙары тарихына бағышланған ғилми монографияларҙың тәүге 8 томы сығыуы уңайы менән Мәскәүҙә Рәсәй Фәндәр академияһының Шәрҡиәт институтында ҙур сара үтте. "Башҡорт ырыуҙары тарихы: субэтник һәм милли оҡшашлыҡтар проблемаһы" темаһына арналған ҡорҙа проект етәксеһе, билдәле тарихсы һәм тележурналист Салауат Хәмиҙуллин, проект авторҙарының береһе, этнограф, тарих фәндәре кандидаты Юлдаш Йосопов, танылған публицист, философия фәндәре кандидаты Азат Бердин сығыш яһаны.

Түңәрәк ҡорҙа шулай уҡ билдәле Рәсәй генетиктары, лингвистары, тарихсылары һәм этнографтары ҡатнашты. Сараны Рәсәй Фәндәр академияһы Шәрҡиәт институтының Үҙәк Азия, Кавказ һәм Урал-Волга буйын өйрәнеү үҙәге етәксеһе Аликбер Аликберов асты. Уның билдәләүенсә, башҡорт ырыуҙары тураһындағы монографиялар кеүек ғилми хеҙмәттәр бик кәрәк. Тәүге өс томға рецензия яҙыусы этнология һәм тарих буйынса белгес, тарих фәндәре кандидаты, ошо уҡ үҙәктең өлкән ғилми хеҙмәткәре Лев Перепелкин был монографиялар тураһында "ғалимдар тарихтың үтә тәрән төпкөлдәренә киткән һәм уларҙың был хеҙмәттәренең әлегә тиңе юҡ", тип баһаланы.

Проект авторы Салауат Хәмиҙуллин әйтеүенсә, башҡорт ырыуҙары тарихына бәйле ғилми монографиялар булдырыу идеяһы күптән барлыҡҡа килгән. Башҡорттарҙың ырыуҙары һаны етәү генә түгел, улар ҡырҡтан ашыу, проект ошоно күрһәтәсәк. Һәр ырыу айырым һәм ентекләберәк өйрәнеүгә лайыҡ. Башҡорт шәжәрәләре был йәһәттән тарихсыларға ныҡ ярҙам итә. "Тәүге тапҡыр Өфөгә килгәс, башҡорттарҙың ете быуынына тиклем яҡшы белеүенә хайран ҡалғайным", - тип һөйләне үҙәктең Урал-Волга буйын өйрәнеү төркөмө етәксеһе Андрей Судьин. Рәсәй Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, филология фәндәре докторы, Тел ғилеме институтының ғилми хеҙмәткәре Анна Дыбо иҫәпләүенсә, был хеҙмәт башҡорт теле диалекттарын өйрәнеүгә лә булышлыҡ итәсәк. Проект авторҙары генетик лаборатория профессоры, Мәскәүҙәге Медик-генетик үҙәктең кешенең популяцион генетикаһы лабораторияһы мөдире Елена Балановская менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итә. Балановская ла фекер алышыуҙа ҡатнашты. Ул ҙур булмаған коллективтың оло хеҙмәтен юғары баһаланы. Бер йыл эсендә ғилми монографияларҙың 8 томы донъя күрҙе, әлеге мәлдә 9-сы томы әҙерләнеп ята. Был эш 40 томдан торасаҡ, тип планлаштырыла, улар һәр бер ырыуға арналасаҡ.

Булып үткән сарала 8 башҡорт ырыуына арналған 8 том презентацияланды. Улар "Йәнәй", "Гәрәй", "Балыҡсы", "Унлар", "Каңны", "Танып", "Уран", "Кобау" ырыуҙарына арналған һәм был ырыуҙарҙың вәкилдәре республиканың башлыса төньяҡ өлөшөндә йәшәй. Тәүге томдарҙың был ырыуҙарға арналыуы юҡҡа ғына түгел, сөнки бөгөнгө көнгә тиклем башҡорттарҙың төньяҡ-көнбайыш ырыуҙары насар өйрәнелгән.

Фатима ЯНБАЕВА,
Әлим ФӘЙЕЗОВ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

ӨФӨ - ЙӘШЛЕК ҠАЛАҺЫ!



Йола буйынса, 12 июнь байрамдары алдынан Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов өлгәшелгән уңыштарға байҡау яһап, киләсәккә пландар билдәләп, киң мәғлүмәт саралары журналистары өсөн матбуғат конференцияһы уҙғарҙы. Ирек Ишмөхәмәт улының һүҙҙәренә ҡарағанда, баш ҡала уҙған йылдар менән сағыштырғанда һәр өлкә буйынса күрһәткестәрен арттыра бара. Әлбиттә, быны статистика һандары ла раҫлай. Ә статистика һәм һандар менән бәхәсләшеү урынһыҙ. Бары тик уларға күҙ һалырға һәм яуланған ҡаҙаныштар өсөн ҡыуанырға ғына ҡала.

Бюджетҡа 1 майға ҡарата 6 миллиард 300 миллион, шул иҫәптән ҡаланың үҙенең килеме 3 миллиард 513 миллион һум, килем ингән. Ғинуар-апрелдә сәнәғәт комплексы предприятиелары тарафынан 215,5 миллиард һумлыҡ хеҙмәт һәм эш күрһәтелгән, ошо осорҙа сәнәғәт етештереүе индексы 101 процент тәшкил иткән. Төҙөлөшкә килгәндә инде, былтырғы биш ай менән сағыштырғанда 20,5 процентҡа күберәк, йәғни 190 мең квадрат метрҙан ашыуыраҡ торлаҡ төҙөлгән һәм файҙаланыуға тапшырылған. Индустриаль ысул менән төҙөлгән торлаҡ 51 процент тәшкил итә. Киләсәктә Өфө йылына 1 миллиондан ашыу квадрат метр торлаҡ төҙөп тапшырыуға йүнәлеш тота. Һуңғы йылдарҙа республикаға ғына түгел, баш ҡалаға ла инвестиция йәлеп итеү күләме арта. Былтыр ҡала иҡтисадына 105,5 миллиард һум инвестицияланһа, быйылғы беренсе кварталда 14,5 миллиард һум булып, былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 12 процентҡа күберәк. Әлеге ваҡытта Өфөлә дөйөм хаҡы 170 миллиард һумдан ашыуыраҡ булған 100 инвестицион проект тормошҡа ашырыла. Инвестицияларҙың 90 проценты шәхси эшҡыуарҙар өлөшөнә тура килә. Ошо проекттарҙың барыһы ла файҙаланыуға тапшырылған осраҡта, улар өҫтәмә рәүештә 17 мең эш урыны бирәсәк. Шулай уҡ коммуналь һәм торлаҡ хужалыҡтарында ла мөһим эштәр башҡарыла. Транспорт паркы ла яңыртыу кисерә.

Статистика һандарын иғтибар менән өйрәнгәндә, улар артында барыбер ҙә кеше факторы, гражданстар өсөн уңайлы тормош һәм йәшәү шарттары тыуҙырыу маҡсаты торғаны аңлашыла. Һөҙөмтәне иһә әллә ҡайҙан эҙләйһе түгел - мартҡа тиклем баш ҡалала 4 меңдән ашыу бала тыуған, тәбиғи үҫеш 485 кеше тәшкил иткән. Беренсе ғинуарға ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, халыҡ һаны 1 миллион 116 мең кеше рубежын үткән. Өфөнө йәшлек ҡалаһы тиергә лә мөмкин - халыҡтың 50 процентын 35 йәштән йәшерәктәр тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта, ул кәләштәр ҡалаһы ла: ҡатын-ҡыҙ ир-аттан 106 меңгә артығыраҡ. Демографик күрһәткестәрҙең артыуы, балалар тыуыуы, әлбиттә, яҡшы күренеш, әммә был процесс үҙе артынан уҡ балалар баҡсалары мәсьәләһен дә тыуҙыра. Юҡһа, уҙған быуаттың 90-сы йылдары башында баш ҡалала 160 балалар баҡсаһы төрлө ойошма һәм учреждениеларға бирелеп, үҙенең профилен үҙгәртә. Әлеге ваҡытта уларҙы кире ҡайтарыу һәм яңыларын төҙөү буйынса эштәр алып барыла. Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, әгәр ошо объекттар үҙ функцияһын үтәгән булһа, бөгөн балалар баҡсалары проблемаһы көн үҙәгендә тормаҫ та ине.

Юҡҡа ғына, эш туҡмағы - аш, тимәйҙәр. Был йәһәттән Өфөнөң дөйөм туҡланыу әйләнеше артыуы ла бушҡа түгелдер. Бында шуны ла билдәләп китергә кәрәк: былтыр баш ҡалала барлығы 350 ауыл хужалығы йәрминкәһе уҙғарылып, унда 700 миллион һумлыҡ продукция һатылған. Ҡала халҡы сауҙа предприятиеларындағынан 10 процентҡа оҙонораҡ азыҡ-түлек запасы алып ҡыуанһа, ауыл хужалығы продукцияһын етештереүселәр тауарын һатып, ҡулаҡсаға эйә булған.

Ҡала үҫешенең һәм халыҡ өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыуҙың тағы бер күрһәткесе булып эшһеҙҙәр һаны тора, тиергә мөмкин. 15 майға ҡарата рәсми рәүештә теркәлгән эшһеҙҙәр һаны 7174 кеше булһа, мәшғүллек хеҙмәте органдары 7360 вакантлы урын тәҡдим итә. Был вакансиялар, нигеҙҙә, эшсе һөнәрҙәренә, ә эшһеҙҙәр был урындарға барырға теләмәй, үҙҙәренең профессияһы-белеме буйынса эш килеп сыҡҡанын көтә.

Өфөнөң көндән-көн матурлана барыуы инде бер кем өсөн дә аптырарлыҡ күренеш түгел. Ай һуңында баш ҡала уникаль фонтан менән халыҡты һәм ҡунаҡтарҙы таң ҡалдырмаҡсы. "Ете ҡыҙ" фонтаны башҡорт халыҡ легендаһы буйынса эшләнә. Унда төп образ булып милли кейемдәге ҡыҙҙар һыны торасаҡ. Сер итеп кенә әйткәндә, фонтан эргәһендә экран урынлаштырылып, унда "Ете ҡыҙ" бейеүе трансляцияланасаҡ. Был, ниндәйҙер кимәлдә Өфөгә тағы ла милли колорит өҫтәйәсәк.

Ирек Ялалов белдереүенсә, Салауат Юлаев проспекты ҡаланың йөҙөн күрһәтеп торорға тейеш. Шуға күрә унда ла төҙөлөш эштәре алып барыласаҡ. Ғөмүмән, Европаның билдәле архитекторҙары Өфөнө парк итеп күрә. Сөнки утрау кеүек йәшеллеккә төрөнгән мегаполистар донъяла бик һирәк. Баш ҡалала бер кешегә 202 квадрат метр йәшеллек тура килә. Һәм төҙөлөш алып барылғанда ла уның ошо үҙенсәлеге иҫәпкә алынырға, йәшелләндереү эштәре дауам итергә, халҡы миллиондан ашҡан ҡалалар менән сағыштырғанда, сәнәғәт үҙәге булыуға ҡарамаҫтан, таҙа аураһы һаҡланырға, йәштәр тарафынан да ошо йүнәлеш дауам ителергә тейеш. Ә Өфөнөң үҫеш ҡеүәте ҙур әле.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓13 июндә Ленинград өлкәһенең Сырҙы ауылында һабантуй уҙғарыла. Унда Санкт-Петербург һәм Ленинград өлкәһе губернаторҙары, Башҡортостандан һәм Татарстандан килгән рәсми делегациялар ҡатнаша. Быйыл Санкт-Петербургта уҙғарылған һабантуйға Өфө артистарының йыйылма командаһы һәм Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актерҙары китте. Йыл һайын ошо байрамға 100 мең самаһы кеше йыйыла.

✓2014 йылғы мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостандың идара итеүсе компаниялары Рәсәй буйынса иң яҡшы бишәү иҫәбенә инде. "Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ реформаһы" сайтында компанияларҙың рейтингы баҫылған, уға ярашлы Башҡортостандың идара итеүсе компаниялары 38,54 балл йыйған һәм икенсе урын алған.

✓Өфөләге Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС саммиттарында Белорусь Президенты Александр Лукашенконың ҡатнашыуы күҙаллана. Был хаҡта, Белорустың Сит ил эштәре министрлығы башлығы Владимир Макейға һылтанма яһап, "Новости" Рәсәй мәғлүмәт агентлығы хәбәр итә. Белоруссияның тышҡы сәйәсәт ведомствоһы башлығы һүҙҙәренсә, республика менән ШОС һәм БРИКС-та ҡатнашыусы илдәр араһында яҡшы мөнәсәбәт булдырылған.

✓Башҡортостандан алты йәш ғалим РФ Президенты грантына лайыҡ булды. Кандидатлыҡ яҡлаған ғалим өсөн гранттың күләме - 600 мең, докторлыҡ дәрәжәһендәге ғалим өсөн 1 миллион һум тәшкил итә. Грант алыусылар араһында БДУ-нан йәш ғалимдар Айгөл Манапова менән Искәндәр Сәйетбатталов та бар.

✓Раил Кузеев исемендәге этнологик тикшеренеүҙәр институты ғалимдары (етәксеһе - профессор Айһылыу Юнысова) Рәсәй гуманитар ғилми фондының грантына лайыҡ булды. Был аҡсаны улар "Көньяҡ Уралда ислам" геомәғлүмәт системаһы" проектын ғәмәлгә ашырыу өсөн тотонасаҡ. Проект сиктәрендә Рәсәйҙә тәүге тапҡыр уникаль геомәғлүмәт ресурсы булдырыласаҡ, донъяның теләһә ниндәй мәйөшөндә йәшәүселәр Көньяҡ Уралда исламдың үҫеше хаҡында мәғлүмәт алыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ, тип хәбәр ителәр институттан.

✓ *Бөгөн дә ошо илдең тулы хоҡуҡлы хужалары икәнлегебеҙҙе иҫтән сығармайынса, ил кимәлендә һаман да хәл ителмәгән мәсьәләләрҙе еренә еткереп ҡуйыуҙы талап итергә тейешбеҙ.*

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

Йәйҙең тәүге көнө Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө тип билдәләнһә, башҡорт халҡы өсөн ул бынан 20 йыл элек Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ойошторолоуы менән мөһим тарихи дата булараҡ әһәмиәтле. Ул тарихи ваҡиғала беренсе тапҡыр республиканың район-ҡалаларынан ғына түгел, Рәсәй төбәктәренән, сит илдәрҙән 600 делегат һәм 200-ҙән ашыу ҡунаҡ ҡатнашты. Оло форумда ҡабул ителгән документтар һуңынан башҡорт халҡының проблемаларын хәл итеү программаһы булып торҙо.

ЕГЕРМЕ ЙЫЛ ЭЛЕК...

Юбилей айҡанлы уҙғарылған матбуғат конференцияһында башҡорт йыйындарының әһәмиәтен билдәләп, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев, башҡорт ҡәбиләләре һәм ырыуҙарының милләт өсөн мөһим мәсьәләләрҙе электән берләшеп хәл итеүен, XX быуат башында Башҡорт автономиялы республикаһын ойоштороуҙа уларҙың ҙур роль уйнауын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Уҙған быуаттың 90-сы йылдары уртаһында ауырлаша барған иҡтисади хәл-торош, ассимиляция һәм миграция процестары нөҕөмтәһендә башҡорттарҙың һаны кәмеүе, башҡорт теленең, йолаларҙың, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең, мәҙәниәттең юғала барыуы халыҡтың үҙаңына, милли үҫешенә кире йоғонто яһаны, - тине Румил Тәлғәт улы. - Был хәүефле симптомдар башҡорт милли ойошмаларын Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын төҙөү инициативаһы менән сығыш яһарға мәжбүр итте. Бөгөн Ҡоролтай бөтөн донъялағы башҡорттарҙы берләштереүсе орган булып тора..."

Социолог, философия фәндәре докторы Фәнил Фәйзуллин башҡорт халҡының Рәсәйҙең федератив ҡоролошона нигеҙ һалыусыларҙың береһе булыуына баҫым яһап, шулай тине: "Башҡорт халҡы Рәсәй составына беренселәрҙән булып һәм буйһоноп түгел, ә үҙенең талаптары менән ирекле рәүештә ингән, - тине ул. - Шул ваҡытта уҡ беҙ Рәсәй дәүләте башҡорттарҙың ойоштороу һәм идара формаларына, дин эшенә ҡыҫылмаҫҡа, ергә аҫабалыҡ хоҡуғын ҡалдырырға тейешлеген аныҡ билдәләү менән бер рәттән, ил сиген нығыраҡ кеүек үтә лә етди һәм мөһим бурысын да үҙ иңебеҙгә алғанбыҙ, илдең иҡтисадын үҫтереү маҡсатынан яһаҡ түләгәнбеҙ. Бөгөн дә ошо илдең тулы хоҡуҡлы хужалары икәнлегебеҙҙе иҫтән сығармайынса, ил кимәлендә һаман да хәл ителмәгән мәсьәләләрҙе еренә еткереп ҡуйыуҙы талап итергә тейешбеҙ. Был йәһәттән авангардта милли-мәҙәни ойошмалар тора ла инде. Улар дәүләттә булған көсөргәнеште киҫкенләштерергә түгел, ә ошо ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдарын, механизмдарын бергәләп эҙләргә бурыслы. Шуға ла Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының башҡорт телен уҡытыуҙы, йәштәрҙә ватансылыҡ, илһөйәрлек тәрбиәләүҙе, белем биреү системаһында төбәк компонентын нығыраҡ ҡалыуҙы талап итеүе лә юҡҡа түгел. Сөнки үҙ халҡыңдың, төбәгеңдең тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, мәҙәниәтен, туған телеңде белмәй тороп, илһөйәр булып булмай. Был йәһәттән Ҡоролтайҙың үҙенең программаһы бар. Әммә уны тормошҡа ашырыу өсөн дәүләт органдары тарафынан ярҙам кәрәк".

Политолог, философия фәндәре кандидаты, сәйәсәт фәндәре докторы Мансур Әйүпов бөгөн республиканың, барлыҡ өҫтөнлөктәрен файҙаланып, күрше-тирә субъекттар араһында конкурентлыҡ һәләтен арттырырға тейешлеген билдәләне. "Был эштә, әлбиттә, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының төптән егелеп эшләүе зарур, - тине Мансур Әнүәр улы. - Эйе, беҙҙең бай тарихыбыҙ бар. Артыбыҙҙа республика йәшәһен өсөн ҙур ҡорбандар биргән бөйөк халҡыбыҙ тора. Ләкин бөгөн улар өсөн ғорурлыҡ тойғоһо кисереү, улар менән маһайыу ғына аҙ. Беҙ туған телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе йәшәтеү, халҡыбыҙҙың милли үҙаңын үҫтереү өсөн барыһын да эшләргә бурыслы һәм был эштең башында ла Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты торорға тейеш..."

ШУЛАЙ ИТЕП...

Бөгөн Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгрессы) бүлексәләре Башҡортостандың һәр район-ҡалаһында ғына түгел, Рәсәй Федерацияһының 30 төбәгендә, Үзбәкстанда, Ҡазағстанда, Ҡырғыҙстанда, Тажикстанда, Латвияла, Эстонияла, Украинала, Беларуста, Германияла, Америкала, Швецияла, Швейцарияла, Финляндияла, Венгрияла, Мысырҙа, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә, Ҡытайҙа һ.б. илдәрҙә бар. Башҡарма комитет ҡарамағында 10 комиссия эшләй. Ҡоролтай инициативаһы менән бер нисә йәмәғәт ойошмаһы булдырылған, "Ватандаш" журналы ойоштороlған. Башҡарма комитет составына Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 5 депутаты, РФ Дәүләт Думаһы депутаттары, район советтары депутаттары ингән. Быйыл, ШОС һәм БРИКС саммиттары уҙғандан һуң, көҙөн IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын уҙғарыу планлаштырыла.

Земфира ХӘБИРОВА.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

ФАТИРҘАР ҠУРТЫМҒА БИРЕЛӘСӘК

Торлаҡһыҙ интеккән кешеләргә социаль файҙаланыуҙағы фатирҙар ҡуртымға бирелеүе мөмкин. Әлегә был мәсьәлә тураһында төбәк законына үҙгәреш индереү буйынса проект әҙерләнгән һәм ул БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың профиль комитеты тарафынан беренсе уҡыуға тәҡдим итеүгә хупланған.

Новелла республиканың 390 мең кешеһенә ҡағыла. Документ федераль ҡануниәттең үҙгәреүенә бәйле. Проект төбәктең коммерция булмаған торлаҡ фондын булдырыу һәм уның менән идара итеү вәкәләтен асыҡлай. Төбәк граждандарҙы социаль найм буйынса торлаҡ бинаһына мохтаж тип таныу өсөн граждандарҙың килем күләмен үҙе билдәләй. Проектҡа ярашлы, дәүләт власы органы, урындағы үҙидара органы йәки шәхси торлаҡ фондының торлаҡ бинаһы милексеһе булып торған ойошма бындай фатирҙарҙы ҡуртымға биреүсе булып тора. Найм договоры бер йылдан кәм, әммә 10 йылдан оҙағыраҡ булмаған ваҡытҡа төҙөлә. Социаль фатирҙарға хоҡуғы булған граждандар иҫәбен муниципалитеттар алып бара. Ҡуртым суммаһы һәр муниципалитетта төрлө, әммә һәр категория граждан түләрлек буласаҡ. "Был осраҡта һуҙ ҡуртым торлағын арттырыу тураһында бара. Беҙҙә үҙенең йәки кредит средстволары иҫәбенә торлаҡ төҙөй алған граждандар, шулай уҡ средстволары етмәгәнлектән бер программала ла ҡатнаша алмаған кешеләр бар. Яңы закон проектында һуҙ килемдәре аҙ булыусыларға ла, үҙ аллы йорт һала алмаған категорияға ла инмәүселәр тураһында бара. Бындай категория граждандар республикала 390 мең самаһы", - ти Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе Хәлит Мәхмүдов.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

МАҠСАТТАР ТОРМОШҠА АША

1990 йылдың 12 июнендә РСФСР Халыҡ депутаттары съезы РСФСР-ҙың Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итте.

Был мөһим документ Рәсәй Федерацияһының үҫешенә, уның эске һәм тышҡы донъяуи сәйәси аренала үҙ позицияларын нығытыуға хоҡуҡи нигеҙ булдырҙы. Декларация ҡабул итеү берҙәм Рәсәй дәүләтен һаҡлап ҡалырға һәм ысын федерация төҙөргә мөмкинлек бирҙе, сөнки, бер яҡтан, милли дәүләттәрҙе бөтөрөү һәм дефедерализациялау, икенсе яҡтан, элекке СССР составындағы Рәсәйҙең автономиялы берәмектәренә дәүләт статусы биреү, йәғни тотош дәүләттең яҙмышын фактик рәүештә хәл итеү буйынса тамаҡ ярып ҡысҡырыусылар ҙа булды. Декларация ҡабул иткәндән һуң ил бөтөнләгәнә янаған хәүеф бер ни тиклем кәмене, артабан Конституция ҡабул итеү Рәсәйҙе тарҡалыуҙан һаҡлап алып ҡалды.

Декларация - ул хоҡуҡи ғына түгел, тәү сиратта, Рәсәйҙә демократик реформалар башланыуға нигеҙ булып торған сәйәси дәүләт акты ла. Был документ ҡатмарлы сәйәси көрәштә тыуҙы. РСФСР съезының ҡаҙанышы - РСФСР Конституцияһының элекке СССР-ҙың ҡануниәт акттарынан өҫтөнлөклөләгә; сәйәси партиялар һәм йәмәғәт ойошмаларына тигеҙ хоҡуҡи мөмкинлектәр бирелеүе; закондар сығарыу, башҡарма һәм суд властарының бүленеү принциптары иғлан ителеүе һәм шулай уҡ РСФСР составындағы автономиялы республикаларҙың, өлкәләрҙең, округтарҙың хоҡуҡтары һиҙелерлек киңәйеүе ул. Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларация иң юғары маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу - һәр кешенең лайыҡлы тормошҡа, һәр халыҡтың үҙҙәре һайлаған формала үҙбилдәләнешкә хоҡуғын тәьмин итеү хаҡына иғлан ителде.

Декларация ҡабул ителгәндән һуң уҙған 25 йыл ошо маҡсаттарҙың ғәҙел булыуын һәм тормошҡа ашыуын күрһәтте. Рәсәй Федерацияһында халыҡтың тормош кимәле һәм сифаты яҡшыра. Быны объектив күрһәткестәр: халыҡтың йәшәү кимәле күтәрелеүе, кешелек капиталы сифатының үҫеүе, һәр яҡлап үҫешкән шәхес тәрбиәләү өсөн яңынан-яңы шарттар тыуҙырылыуы ҙа раҫлай. Декларацияла ҡаралған туған телдәрҙе ирекле үҫтереү һәм уларҙы ҡулланыу даирәһен арттырыу маҡсаты ла тормошҡа ашырыла: мәктәптәрҙә туған телдәрҙә белем алыу мөмкинлеге бар, милли мәҙәниәттәр һәр яҡлап иғтибар үҙәгендә, милләт-ара татыулыҡҡа өлгәшелгән. Был бигерәк тә минең тыуған Башҡортостаным миҫалында асыҡ күренә. Тик беҙгә ана шул закондар менән нығытылған хоҡуҡтарыбыҙҙы белеп, уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн тырышлыҡ һалырға ғына кәрәк.

Иршат ФӘХРЕТДИНОВ,
РФ Дәүләт Думаһы депутаты,
юридик фәндәр кандидаты.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Настурция

❖ Баҡсасылар араһында бик популяр булған настурция сәскәһе халыҡ медицинаһында ла ҡулланыла. Ул йөрәк мускулын ҡан менән тәьмин итеүҙе яҡшыртыу маҡсатында, йүткереүгә ҡаршы, һейҙек-енес системаһы ауырыуҙарында, үт ҡыуығында таш булғанда файҙаланыла. Настурция өлкән йәштәге кешеләргә кәңәш ителә, уның составындағы каротин менән көкөрт атеросклероздан һаҡлай. Настурцияның 1-2 япрағын йәки сәскәһен салатҡа өҫтәйҙәр.

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған настурция япраҡтары менән сәскәһенә 150 мл араҡы ҡоялар. 14 көнгә ҡараңғы урынға ҡуялар һәм болғатып торалар. Һөҙөргә һәм бронхит, киҙеү, халҡын тейгәндә, нейҙек-енес системаһы сирҙәренән, тиҙ арып барғанда көнөнә 3 тапҡыр 20-шәр тамсы эсергә.

❖ Стоматит, ангина мәлендә настурцияның һыуҙағы төнәтмәһе менән ауыҙ ҡыуышлығын сайҡаталар.

❖ Настурция менән кесерткәндең 10-ар япрағын, 1 ҡалаҡ ҡаҙ үләне тамырын ит турағыстан үткәрергә, 0,5 мл араҡы ҡойорға, 15 көн төнәтергә. Сәсте нығытыу өсөн көн аша сәс тамырына һөртөргә. Бер аҙнанан һуң һөҙөмтәһе күренә: сәстәр нығына, ҡойолмай башлай.

Ҡалҡан биҙен дауалау

❖ Ҡаҙ үләненең халыҡ медицинаһында лапчатка белая тип йөрөтөлгән төрө ҡалҡан биҙенән яҡшы сара, ул ҡалҡан биҙе эшмәкәрлеге яйға һала. Дауаланыу өсөн үләнде дарыуханаһынан һатып алығыҙ, сөнки ул күп кенә төбәктәрҙә "Ҡыҙыл китап"ҡа индерелгән үләп булып иҫәпләнә. Төнәтмә әҙерләү өсөн 100 грамм ҡаҙ үләне тамырына 1 литр араҡы ҡояһың. Ҡараңғы төҫтәге быяла һауытта 30 көн төнәтәһең. Ашарҙан 20 минут алда 30-ар тамсы ҡабул итергә. Ҡалҡан биҙен дауалау курсы - 30 көн, һуңынан 1 аҙна ял итеп алығыҙ. Кәрәк булғанда дауалау курсын ҡабатларға. Был үләндең һыуҙағы төнәтмәһе лә яҡшы һөҙөмтә бирә. Тик йөрәк эшмәкәрлеген күҙәтеп торорға кәрәк.

Айбикә ЯҠУПОВА.

✓ *Сәмреғош - батшаларҙың ҡурсалаусыһы, батша власы атрибуты, кешеләрҙе бәләнән һаҡлаусы. Ауыр саҡта батырҙар уны ярҙамға саҡыра һәм ул осоп килеп етә.*

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

СӘМРЕҒОШ

Башҡорт халыҡ фольклорында бөркөт ҡоштар батшаһы булараҡ һүрәтләнә. "Бирәнһылыу - Бире ҡыҙы" әкиәтендә бөркөттәр ханы Бөркөтхан бар. "Төлкө һәм бөркөт" әкиәтендә бөркөттө ҡоштар батшаһы тип ҙурлайҙар. Ышаныуҙар буйынса, бөркөттөң күҙе ныҡ осҡор, ул ҡырҡ тау аша булған нәмәне лә күрә ала.

Бөркөттөң изге, Алла ҡошо булыуы бигерәк тә мифик ҡош образы Сәмреғошта асыҡ сағыла - күп белгестәр уны бөркөт тип иҫәпләй. Беренсенән, Сәмреғош - иң киткес ҙур ҡош. "Дандан батыр" әкиәтендә батыр уның арҡаһына ултырып осҡан саҡта ҡошто ашатып барыу өсөн үҙе менән 40 ҡыр кәзәһе итe ала. "Айыуғолаҡ" әкиәтендә батыр 40 мискә итте ҡоштоң арҡаһына бәйләй һәм үҙе лә менеп ултыра. Ҡош һауаға күтәрелгәс, ҡанаттарын елпеүҙән күл ҡайнап сыға, ә тирәктәр ергә тиклем эйелә. Хушлашҡан саҡта ҡош Айыуғолаҡҡа 40 саҡрым алыҫлыҡҡа китеп, соҡор ҡаҙып, шунда төшөп ятырға ҡуша. Юғиһә, батыр ҡош һауаға күтәрелгәндә ҡупҡан дауылда аяғында ҡала алмаясаҡ, ти ул.

Әкиәттәрҙә Сәмреғош бөтөн ҡоштарҙың батшабикәһе. "Урал батыр" эпосында Самрау - бөтөн ҡоштарҙың батшаһы. Ул - үлемһеҙ, һауала ла, ерҙә лә йәшәй ала. Юғары күккә ҡараған изге йән эйәһе булараҡ, Самрау Ҡояшҡа һәм Айға өйләнгән, шул уҡ ваҡытта, батшалығы ерҙә. Был батшалыҡта барыһы ла бәхетле, барыһы ла тигеҙ, бүреләр менән һарыҡтар, төлкөләр менән тауыҡтар татыулыҡта йәшәй, бында үлем, ҡан ҡойош юҡ. Күренеүенсә, башҡорт халыҡ ижадында Сәмреғош (Самрау) ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егет сүрәтендә лә сығыш яһай.

Сәмреғош халыҡ ижадының башҡа жанрҙарында ла осрай. "Алтын ҡош" әкиәтендә ул ағастар ҙа, ҡоштар ҙа, йәнлектәр ҙә алтындан булған (алтын - ҡояш символы) донъяла йәшәй. Икенсе бер әкиәттәрҙә ул ер сигендә, йәки кешелек донъяһынан эсе тулы йыртҡыс йәнлектәр, ағыулы йыландар булған янып ятыусы урмандар, ҡотороп ятҡан океан айырып торған ерҙә, йәиһә Ҡаф тауы артында көн күрә. Ырымбур өлкәһендә яҙып алынған легендала ул кешеләр араһында йәшәй тиелә. Әкиәт геройҙары иһә Сәмреғош менән йышыраҡ ер аҫты батшалығында осраша.

Сәмреғошҡа тотем сифаттары хас. Иң тәүҙә, ул кеше кеүек һөйләшә белә, кеше кеүек тормош алып бара, батшалар менән дуҫлаша. "Урал батыр" эпосында ул ҡайғыра, илай, шатлана. "Майсәрүәр" әкиәтендә Сәмреғош бер әбейҙең ҡыҙы була, тип әйтелә.

"Урал батыр" эпосында Самрау тәү кешене хәтерләтә. Ерҙә бер кем булмағанда ул үҙенә йәр эҙләп, һауаға күтәрелә һәм уға Ҡояш менән Ай оҡшап ҡала. Самрау уларға өйләнә. Улар уға үлемһеҙ ҡыҙҙар - Һомай (Һомай тыуғас та әсәһе уның тәнен Йәншишмәнең һыуы менән йыуа һәм үҙенең нурҙары менән ҡойондора) менән Айһылыуҙы табып бирә. Һомай менән Айһылыу - башҡорттарҙың тәү әсәһе.

Сәмреғош - батшаларҙың ҡурсалаусыһы, батша власы атрибуты, кешеләрҙе бәләнән һаҡлаусы. Ауыр саҡта батырҙар уны ярҙамға саҡыра һәм ул осоп килеп етә. Ҡайһы бер әкиәттәрҙә батша һайлаған мәлдә Сәмреғош халыҡҡа ярҙамға килә, мәҫәлән, "Ғәйнизар менән Етемйәр" әкиәтендә ул Етемйәрҙең башына ҡуна һәм халыҡ уны батша итеп һайлай.

Азалия ИЛЕМБӘТОВА.
"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.
(Дауамы бар).

ХӘТЕРКИТАП

ЕҢЕҮГӘ ИНДЕРГӘН ӨЛӨШ...

йәки Тыл һалдаттарына мәдхиә

ЕҢЕҮГӘ 70 ЙЫЛ 1945 2015

Бөйөк Ватан һуғышы шаҡымаған ҡапҡа, унең ипкене бәрелмәгән кеше юҡтыр ул. Нисек кенә ауыр булмаһын, дошманды изге еребеҙҙән ҡыуыу маҡсаты өсөн барыһы ла сабыр һәм сыҙам булырға тырыша ул йылдарҙа. Егерме һигеҙ миллиондың иңенә төшкән ауырлыҡ Баймаҡ районының ҙур бер ауылын - Ниғәмәтте лә урап үтмәй. Ауылыбыҙҙың өлкән кешеләре тәүгеләрҙән булып һуғышҡа китеүсене, тәүге ҡара ҡағыҙҙы, тылдағы тәүге үлемде хәтерләп, бөгөн дә ауыр көрһөнөп ҡуя. Башлап һуғышҡа китеүсе Әйүп Ғайсинға бер төн эсендә тиренән тун тегеп, бейәләй, шарф бәйләп, баштан аяҡ кейендереп, бөтөн ауыл халҡы менән бергәләп оҙаталар. Ай үтеүгә Ғималетдин Кирамов, Ҡәнзәфәр Вәлиев һәм тағы бик күптәрҙе фронтҡа алалар. Уларҙың урынына 12-13 йәшлек үҫмерҙәр донъя йөгөн тартыуға егеләләр. Был иҫтәлектәрҙе үткән быуаттың 90-сы йылдар аҙағында тыл ветерандары менән осрашҡан саҡта яҙып алғайным. Уларҙың бик күптәре был донъя менән күптән алыш-биреш ғәмәлдәрен өҙгән инде, ауыр тупраҡтары еңел булһын. Ә шулай ҙа был яҙмаларҙа һуғыш йылдарында тылда эшләүселәрҙең күргәндәре-кисергәндәрен һүрәтләгән хәтер һаҡлана, тип, уны "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары иғтибарына тәҡдим итмәксе булдым.

"Беҙ дәрестән сығып, өйгә ҡайтҡас, әҙ генә ҡапҡылап алыуға, йә агроном вазифаһын башҡарыусы, йә бригадир килә лә, тәҙрәгә сыбыртҡыһының таяғы менән шаҡып: "Фәлән баҫыуға барып, ҡалған башаҡтарҙы сүпләп, көлтә бәйләгеҙ!" - тип китә. Беҙ, балалар, тиҙ генә йыйынабыҙ ҙа, шул баҫыуға барып, көлтә бәйләйбеҙ. Көлтә бәйләргә көс етмәй, йә бәйләй белмәйбеҙ, беҙҙең менән бергә йөрөгән Йәһүҙина Рәхимә, Хәйсәрова Зәһүрә, Ҡолһарина Факиһа апайҙар, уларҙан йәшерәк ҡыҙҙар-малайҙар - Рахманғолова Сабира, Иҫәнбаева Хәнифә, Хәсәнова Рәхимә, Йәһүҙина Рәхимә, Бикмәтова Шәкирә, Кинйәбулатов Әйүп, Хәсәнов Минлеәхмәт һәм тағы бик күптәрҙең индәренә көс күберәк төшә. Уҡытыусы Мотаева Рәйсә, Биишева апайҙар ҙа был эштә ярҙам итә ине, беҙ ҙә уларҙан ҡалышмаҫҡа тырышып эшләнек - 8-9 йәштә дошманды тик ошолай эшләп кенә еңәсәгебеҙҙе аңлай инек", - тип хәтерләгәйне Мостафа Алтынғужин.

Әсәһе, апаһы менән бергә колхоз эшендә эшләүсе Йыһанур Мырҙағәлин да үҙ хәтирәләре менән уртаҡлашҡайны: "Беҙ туйғансы ашай ҙа алмай торғайныҡ ул саҡта. Ләкин мыжырға ярамай. Ә бына дошманға үс үҫкәндән-үҫә бара. Шулай ҙа ҡайһы берәүҙәр аслыҡҡа сыҙамай, баҫыуҙа ҡар аҫтында ятып ҡалған башаҡ һәм ҡырлыҡ үләндәрен ашап, ағыуланып үлде. 14 йәшлек Хәнифә исемле ҡыҙҙың вафат булғанын хәтерләйем. "Тәҙрә ҡорғанын күтәреп ҡуйығыҙ әле, иптәштәрем баҫыуға киткәнен ҡарап ҡалайым", тип ятҡан тип һөйләнеләр. Беҙ уны йәлләп иланыҡ, шунан бер-беребеҙгә ант бирҙек: "Дошманды еңер өсөн тағы ныҒыраҡ эшләйек!" Кинйәбулатова Һәҙиә апай, күҙ йәшегеҙҙе күрһәтмәгеҙ, дошмандың үсе ҡанмаһын, башығыҙҙы күтәрегеҙ, тип беҙҙе илауҙан тыя торғайны".

Башаҡ ашап ағыуланған Хәнифәнең әсәһе Һәшиә апай, үгеҙ егеп, колхозда утын ташый, аҙаҡ уны һал ағыҙырға ебәрәләр. "Һәшиә апай шул тиклем көслө булды, ирҙәр кеүек эшләне. Утынды һөйрәй алмай торһа, үгеҙҙең ҡойроғон бороп тотоп ала ла, яурыны менән терәүләп, йөктө һөйрәшә торғайны", - тип хәтерләйҙәр уның тураһында Әминев Заһит, Ишҡыуатов Мөбәрәктәр. Көслө булғанға күрә, Һәшиә, Исмәғилева Сәрбиямал апайҙар күберәк ирҙәр эшендә йөрөгән. Улар Таулы йылғаһының башында сажын тартҡандар. Көҙ етһә, уңыш йыйыуҙа ҡатнашҡандар, атҡа көлтә тейәп, колхоз аҙбарына ташығандар. Ат менән йә үгеҙ егеп йөрөүгә ҡатын-ҡыҙҙар бик үк батырсылыҡ итмәгән, ә бына Сәрбиямал Исмәғилева, Һәҙиә Кинйәбулатова, Һәшиә Иҫәнбаева, Ҡобора Рәжәповалар өсөн был ғәҙәти эш булған.

"Эштән әҙ генә бушаһаҡ, һуҡыр шәм яҡтыһында фронтҡа хат яҙа инек, - тип һөйләгәйне Исмәғилева Хәйерниса. - Атай - сәйәси золом ҡорбаны, ә өлкән ағайым Әнүәр 1941 йылдың сентябрендә һуғышҡа китте. Мин уға әленән-әле хат яҙа инем. Беҙҙең менән эшләгән Мырҙағәлина Ғәлимә апай, уның улы Әхмәткәрим менән көн дә алмашлап туғандарыбыҙға хаттар яҙа торғайныҡ".

Ғөмүмән, был осорҙа ҡатын-ҡыҙҙар менән балалар ниндәй генә эштә эшләмәгән. Көлтә бәйләп, иген һуғыу тамамланғас, ҡышын баҫыуға көрәк менән ҡар тоторға йөрөгәндәр. "Сөнки ауылда механизатор берәү генә - Ғатауллин Шәрифулла, шулай булғас, күп эште ҡул менән башҡарҙыҡ", - тип хәтерләгәйне ауылда иҫәп-хисап эшен башҡарыусы Ниғмәтуллина Хизбиямал. Уға ла еңелдән булмай, сөнки һуғыш мәлендә лә һалым йыйырға кәрәк. "Өй һайын йөрөп, мал, ғаилә башына күпме һөт, май тапшырырға кәрәклеген әйтергә инәһең дә, үҙҙәренең ҡаралай сәй эсеп ултырғанын күреп, йөрәк һыҙылып, тағы аптырап ҡалаһың", - тигәйне ул.

Ауыр эштән, аслыҡ-һыуыҡтан да ауырыраҡ нәмә була һуғыш йылдарында. Ул да булһа, яҡындарыңдың үлем хәбәрен алыу, етемдәрҙең күҙенә күтәрелеп ҡарау. Тылда ла үлем күп була. Яңы ғына кейәүгә сығып, ире менән йәшәп тә өлгөрмәгән Хәсәнова Мәхүпьямал, әсәһе Мөхлисә аслыҡтан өҙлөгөп үлеп ҡалғас, үҙенән кесе биш туғанын ҡарарға атай йортона ҡайта. Фәниә, Хәмдиә, Ғәлиә, Нуриман, Солтанәхмәт уның ҡураныс ҡына һынына һыйынып үҫә. Ире яу ҡырында ятып ҡала, әммә Мәхүпьямал апай ғүмере буйына уға тоғролоҡ һаҡлап йәшәй. Әсәлек бәхете кисермәйенсә, туғандарына әсәй булған, һөйөләп өлгөрмәйенсә, һөйгәненә хыянат итмәгән бөйөк ҡатын-ҡыҙҙар тағы күпме булғандыр!

Балаһы ете айлыҡ ҡына булған саҡта Тутаева Хәлимә "Таналыҡ" колхозында агроном булып эшләй башлай. Атаһының ҡустыһы - һуғышта, ә ҡатыны тылда аслыҡтан үлгәс, Мерәҫтән Ниғәмәткә ҡайтып, уларҙың 4 балаһын алып тәрбиәләй һәм бригадир булып эшләй. Иренең үлеме тураһында хәбәр алғас, ҡайғыһын ошо балаларҙы тәрбиәләү һәм эш менән баҫа.

Яра тәрән, кем үлсәгән,
Йөрәктәге әсе зарҙы?
Әрем тәмле күҙ йәштәрен
Мөмкинме һуң, кем һанаһын, - тип юҡҡа йырламағандарҙыр инде.

Тыл ветерандарын күргән, баҡыйлыҡҡа күскәнен оҙатҡан һайын, күңелемдә уларға ҡарата йөрөткән ихтирамлы уйҙарымды яңыртам. Үҫеп етеп өлгөрмәһәләр ҙә, яҙмыш ҡушыуы буйынса яугирҙар рәтенә баҫҡан тыл һалдаттары бит улар. Асыҡҡандар, ләкин сабыр иткәндәр, илағандар, ләкин күҙ йәштәре аша йылмая алғандар, ауырығандар, ләкин бирешмәҫкә тырышҡандар, әсәләре менән атайҙарын, ағайҙарын көтә белгәндәр. Был яҙмала бөтәһененең дә исем-шәрифтәрен дә күрһәтеп булманы, шулай ҙа уларҙың бөтәһенә лә беҙҙең быуындың оло рәхмәте юлыҡһын, тип теләйем.

Тыл һалдаты, һинең дә исемең һәйкәлдәргә лайыҡ! Һинең күңел һыҡтауҙарың, күңел яраларың, мәхрүмлектәрең бөгөнгө йәштәрҙең йөрәгенә үтеп инһә ине...

Рәйсә ИҪӘНБАЕВА.
Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылы.

✓ *Уның фекеренсә, ҡәлғә батша Федор Иоаннович батшалыҡ иткән осорҙа, йәғни 1584 менән 1598 йылдар араһында, төҙөлгән. Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыу урыны итеп "Мең улысының башҡорт ере" территорияһы һайланған.*

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

XIX быуаттың 20-се йылдарында батша хөкүмәте феодаль системаны кризистан сығарыу юлын эҙләп, империяның көнсығыш губерналарын, шул иҫәптән Башҡортостанды ла, колониялаштырыуҙың варианттарын уйлай башлай. Ул саҡта тарихи Башҡортостан территорияһы Ырымбур, Пермь, Вятка һәм Һарытау губерналары составына ингән була. Был яҡҡа халыҡтар күсеп килеүен тәртипкә һалыу өсөн батша властары башҡорт ерҙәренең хоҡуҡи статусы менән бәйле мәсьәләләрҙе өйрәнергә ҡарар итә.

АҪАБАЛЫҠ ҺӘР САҠ ҺАҠЛАНҒАН,

йәки Өфө ҡәлғәһе тарихы буйынса тағы бер сығанаҡ



Шуның менән бәйле, Ырымбур губернаһының коллегия кәңәшсеһе Степан Мертваго Ырымбур межа контораһы документтары нигеҙендә материалдар туплай. Йыйылған мәғлүмәттәрҙе Мертваго "Башҡортостандың 1562 йылдан хәҙерге көнгә тиклем Ырымбур губернаһындағы ерҙәргә, ул ерҙәрҙәге бөтә нәмәгә һәм хоҡуҡтарға эйә булыуы тураһында ҡыҫҡаса тарихи күсермә" тип атай. Был эшен автор Сенаттың межа департаментына биргән, күрәһең, сөнки хәҙер ул Санкт-Петербург ҡалаһындағы Рәсәй Дәүләт Тарихи архивы фондында һаҡлана.

Автор, башҡорттар Рус дәүләтенә "ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә" үҙҙәре теләп ҡушыла, быныҢ өсөн батша Иван Грозный башҡорттарға ергә мәңге хужа булыу хоҡуғы бирелеүе тураһында грамота ебәрә, тип билдәләй. Дөйөм батша грамотаһынан тыш, һәр ырыуға батша "һаҡлау грамоталары" тапшыра. Һуңғы документтар барлыҡҡа килеүенең асылын С. Мертваго "...ундағы башҡорттарҙы үҙ биләмәләрендә бер кем дә ҡыҫырыҡламаһын өсөн" дәүләт яғынан гарантия булған тип аңлата. Ошонан һуң батша властары, башҡорттар дәүләт файҙаһына яһаҡ түләгәс, уларҙың ергә хоҡуҡтарын раҫлау сифатында "һаҡлау грамоталары"нан күсермәләр биргән. Мертваго, грамоталарҙың үҙенсәлекле текстары һәм уларҙан күсермәләр башҡорттарҙа һаҡланып ҡалған, тип раҫлай. Был эштә Өфө ҡалаһының барлыҡҡа килеү ваҡыты һәм урыны тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар.

Автор ҡалаға ҡасан нигеҙ һалыныуының аныҡ ҡына датаһын әйтмәһә лә, ҡәлғә барлыҡҡа килеүенең яҡынса осорон күрһәтә. Уның фекеренсә, ҡәлғә батша Федор Иоаннович батшалыҡ иткән осорҙа, йәғни 1584 менән 1598 йылдар араһында, төҙөлгән. Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыу урыны итеп "Мең улысының башҡорт ере" территорияһы һайланған.

1661 йылда хөкүмәт башҡорттарҙың үҙҙәре биләгән бөтә ерҙәргә аҫаба хоҡуғын рәсми раҫлай, тип һыҙыҡ өҫтөнә ала автор. Бындай хәл 1730 йылға, батша указдары сығып, ҡәлғә һәм башҡа ныҡытмалар төҙәй башлағанға тиклем һаҡлана. Был терәк пунктты өсөн баҫып алыу, шулай уҡ һатыу кеүек төрлө ысулдар менән башҡорт ерҙәрен ҡабат тартып ала башлайҙар. Шуға ҡарамаҫтан, властар башҡорттарҙың ергә хоҡуҡтарын таныуҙан туҡтамай.

Документты төҙөүсе фекеренсә, башҡорт ихтилалдары арҡаһында батша хөкүмәте уларҙың ер биләмәләренә сикләргә маташа - ихтилалда ҡатнашыусыларҙың ерҙәрен тартып алыу ошондай сара булырға тейеш була. Мертваго, ергә волость хужа булыуы был санкцияны бойомға ашырыуға ҡамасаулай, тип иҫәпләй. Уның фекеренсә, ер мөнәсәбәтендәге принципиаль үҙгәрештәр XVIII быуаттың 40-сы йылдарынан башлана. Ошо осорҙа рус дворяндары өсөн башҡорт ерҙәрен иркен һатыу-һатып алыу законлаштырыла, Ырымбур ҡәлғәһенә нигеҙ һалып, унда хәрбиҙәр килтереп тултырыла, заводтар төҙөлә башлана. Был йүнәлештә "1741 йылда Яйыҡ йылғаһы буйлап башҡорт һәм ҡырғыҙ халыҡтары араһында" ныҡытылған Ырымбур линияһы һуҙыу иң мөһим сара булып тора. Ҡәлғәләр селтәре барлыҡҡа килеү дәүләттең төбәктә ерҙе һатыу-һатып алыу процесын законлаштырыуын тиҙләтә.

Крайҙа ерҙәрҙе баҫып алыуға ҡарамаҫтан, хөкүмәт башҡорттарҙың ергә аҫаба хоҡуғын таныуҙан баш тартмай, тип раҫлай документты төҙөүсе. 1791 йылда батша манифесы буйынса бөтә башҡорттарҙы үҙ ерҙәренең хужалары итеп таныу тураһында ҡарар ҡабул ителә. БыныҢ менән властар ихтилалда ҡатнашҡан башҡорттар һәм уларҙың тоҡомдары өсөн ер биләүгә сикләүҙәрҙе бөтөрөү тураһында рәсми рәүештә иғлан итә.

Мертваго, XVIII быуаттың икенсе яртыһында төбәкте колониялаштырыу башҡорттарҙың мәнфәғәтен боҙоп алып барыла, тип һыҙыҡ өҫтөнә ала. Айырым алғанда, дворяндар һәм крәҫтиәндәр ер һатып алғанда килешеүҙәрҙе "сирек һәм дисәтинәләр иҫәбе менән түгел, ә ул ҡәлғәләрҙә билдәләнгән межалар һәм тәбиғи ыҙандар буйынса" төҙөүгә өлгәшә. Йәғни ер бүлеүгә документтар төҙөгәндә аныҡ майҙан күрһәтелмәй. Ә был күсеп килеүселәрҙең ерҙе артығы менән биләүенә мөмкинлек аса. Бер үк ваҡытта, улар төбәктә игенселекте үҫтереүгә булышлыҡ итте, тигән һылтау менән ерҙе һатып алыусыларҙың колониялаштырыу процесы аҡлана, ти ул.

Мертвагоның Өфө ҡәлғәһенә 1584-1598 йылдар араһында нигеҙ һалыныуы тураһындағы һығымтаһы нигеҙле күренә. Был танылған ғалим-академиктар П.П. Пекарский менән М.Н. Тихомировтың хеҙмәттәрендә лә раҫлау таба, улар 1586 йылды Өфөнөң башланғыс датаһы тип атай. Авторҙың, Өфө ҡәлғәһе Мең улысы башҡорттарының ризалығы менән уларҙың аҫаба ерендә төҙөлдө, тигән күрһәтмәһе бик мөһим. Был материалдарҙа, батша хөкүмәте сәйәсәтенең яңы этабы 1730 йылдан һуң башлана, тип телгә алына. Күрәһең, автор яңы осорҙоң башланыуын 1735 йылда Ырымбур экспедицияһының эшмәкәрлеге һәм 1736 йылдың 11 февраленән указ сығарыу менән бәйләй. Ул бында колониялаштырыу, ерҙе ирекле һатыу-һатып алыуҙы законлаштырыу, крепостар, заводтарға нигеҙ һалыу, хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм крәҫтиәндәр күбәйеүен күҙ уңында тота. Шул уҡ ваҡытта, төп халыҡтың ерҙәрен тартып алыу сәйәсәте үткәреүгә ҡарамаҫтан, хөкүмәт XVIII быуаттың икенсе яртыһында башҡорттарҙың аҫаба хоҡуғын раҫланы, тип бик ғәҙел билдәләй.

Әммә Мертваго XVIII быуаттағы ер тураһындағы закондарға характеристика биргәндә ҡайһы бер тап килмәүҙәр осрай. Билдәле булыуынса, яңы хөкүмәт курсы 1735-1736 йылдарҙа башлана. Бынан тыш, башҡорттарҙың ергә аҫаба хоҡуғы 1664, 1790 һәм 1793 йылғы указдар менән раҫлана, ә 1661 һәм 1791 йылдарҙағы менән түгел, тип иҫәпләй документты төҙөүсе. Мертвагоның, XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт ихтилалдары хөкүмәттең уларҙың еренә һөжүм итеүенә булышлыҡ итте, тигән фекере менән килешеп булмай. Киреһенсә, тап батша хакимиәтенең башҡорттарҙың ергә хоҡуҡтарын боҙоуы халыҡтың ҡорал күтәреп ҡаршы сығыуына килтерҙе. 1649 йылғы Собор Уложениеһы (Закондар йыйылмаһы) башҡорт аҫабаларының ергә хоҡуҡтарын сикләне: ерҙе һатыу тыйылды, уны арендалау сроктары кәметелде. Был закон XVII-XVIII йылғы ихтилалдар башланғанға тиклем үк ғәмәлгә индерелде.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

Был документ Башҡортостанда ер мөнәсәбәттәре проблемаларын анализлауға арналған. Унда ҡайһы бер аныҡ хаталар ебәрелеүгә ҡарамаҫтан, тотош алғанда, ваҡиғалар барышы объектив һүрәтләнгән. Автор хөкүмәт курсындағы ике ҡапма-ҡаршы тенденцияны күрһәтә алған: бер яҡтан, төбәкте аҡрынлап колониялаштырыуға йүнәлеш, икенсе яҡтан, башҡорттарҙың ергә хоҡуҡтарын өлөшләтә күҙәтеү. Ғөмүмән, Мертвагоның материалдары Башҡортостанда батша властары алып барған ер сәйәсәте тарихы буйынса мөһим сығанаҡ булып тора.

Ирек АҠМАНОВ,
тарих фәндәре докторы, профессор.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

Сергей РУДЕНКО

БАШҠОРТТАР
Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләре

Төньяҡ-көнбайыш өлкәнең көнсығыш районы башҡорттарының һанап үтелгән физик тибы үҙенсәлектәре (**һүрәттәр**) уларҙың составына ингән уғыр компонентының ҡатнашлығы менән аңлатыла. Уғырҙар барлыҡ антропологик күрһәткестәр буйынса был район башҡорттарына яҡындар, бары тик тәпәш буй һәм асыҡ сағылған мезатикефалия буйынса ғына айырылалар.

Төньяҡ-көнбайыш өлкәнең көнбайыш районы Өфө платоһын, Бөрө тигеҙлеген һәм Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышын биләй. Унда танып, елдәк, ҡайлы-ҡаршин, гәрәй, ҡайлы, ҡырғыҙ, бүләр, юрмый һәм башҡа ваҡ ырыу башҡорттары йәшәй. Уларҙың физик тибының айырылып торған үҙенсәлеге - ҡатнаш-пигментация процентының юғарылығы (ҡуңыр тип ни бары 54,3 процент), оҙон буй (166 сантиметр), макроскелия - кәүҙә менән сағыштырғанда аяҡтарҙың артыҡ оҙонлоғо (скелия күрһәткесе 90), уртаса түңәрәк башлылыҡ (түңәрәк башлылар 54,8 процент булғанда уртаса баш күрһәткесе 80,5), сағыштырмаса тар таныулылыҡ (танау күрһәткесе 72) һәм тар йөҙлөлөк (йөҙ күрһәткесе 75,6), бит киңлегенең бәләкәйлеге (141,2 мм).

Башҡортостандың бер төбәгендә лә төньяҡ-көнбайыш өлкәләге кеүек халыҡтың этник сыбарлылығы күҙәтелмәй. Унда башҡорттар араһында рустарҙан тыш типтәрҙәрҙең, татарҙарҙаң, мишәрҙәрҙең, сыуаштарҙың, мариҙарҙың, удмурттарҙың ауылдары осрай. Был өлкәлә тикшерелгән башҡорттар араһында әсәләре башҡорт түгел, ә нигеҙҙә татар, мишәр йәки типтәр булыусыларҙың проценты юғары. Түбәндә айырым башҡорт дачаларында әсәләре башҡорт булмаусыларҙың проценты бирелә.

№10 - юр-меңдәр	40 процент
№70 - әйлеләр	78 процент
№74 - һыҙғылар	50 процент
№86 - ҡаршиндар	67 процент
№91 - ҡайлылар	61 процент
№114 - ҡырғыҙҙар	50 процент
№121 - ирәктеләр	75 процент

Ошо өлкә башҡорттарының борондан атап үтелгән халыҡтар менән ҡушылыуы Башҡортостандың башҡа урындарына ҡарағанда көслөрәк бара. Шуға күрә ҡайһы бер пунктта-рҙа башҡорттарҙың физик тибы ата-олаталарына ҡарағанда улар менән ҡушылған халыҡтарҙың тибына ла бәйле үҙгәрә. Төньяҡ-көнбайыш өлкәнең көнбайыш районына хас типтар һүрәттәрҙә күрһәтелә.

✓ Уңышлы кеше булыр, уңышлы хеҙмәткәр булыр, халҡыңа файҙа килтерер өсөн әллә ниндәй хәтәр-хәтәр күрһәтмәләр буйынса йәшәргә лә кәрәкмәй. Бары тик ғәҙел булырға ғына кәрәк. Тәү сиратта намыҫың алдында ғәҙел бул.

Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса фәнни-тикшеренеү үҙәге бер тиҫтә йыл эсендә балдан, кәрәҙҙән, һитәнән (прополис), инә ҡорт һөтөнән 200-ҙән ашыу продукция етештереп, ошо өлкәлә донъяла тиңе булмаған ойошмаға әүерелде. Үҙәктең бөтөн уңыштары ҙур коллективтың фиҙаҡәрлегенә лә һәм, әлбиттә, шул коллективты туплаған, уны яңынан-яңы идеялары менән алға әйҙәгән етәксе эшмәкәрлегенә лә бәйле. Үҙәктең генераль директоры, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты, биология фәндәре докторы, профессор Әмир Миңнеәхмәт улы ИШЕМҒОЛОВтан уңышлы етәксе һәм уңышлы хеҙмәткәр, яҡшы кеше булыу серҙәре менән уртаҡлашыуын, бал ҡорттары донъяһындағы кешелек өсөн ыңғай өлгө була алырлыҡ ғәжәйеп күренештәр тураһында һөйләүен үтендек.

БАЛ ҠОРТТАРЫ...

бал ғына түгел, һабаҡтар ҙа бирә кешегә

Һәр кем үҙе билдәләй

Яңыраҡ эш бүлмәмә бер журналист килеп инде лә, түргә эленгән бихисап маҡтау ҡағыҙҙарын, рәхмәт хаттарын күргәс: "Ә быларҙы яулар өсөн нисегерәк эшләргә кәрәк? Һеҙ барыһына ла нисек өлгөрәһегеҙ?" - тип, беҙҙең эшмәкәрлектең киңлегенә ишаралап һорай ҡуйҙы. Бөгөнгө әңгәмәне лә тап ошо юҫыҡтан башлау урынлы булыр, минеңсә. Уңышҡа өлгәшер өсөн ниндәй өлкәне, юлды һайларға? Барыһы ла һинең ниндәй һөнәр эйәһе булырға ҡарар итеүеңә генә түгел, ә ошо һөнәрҙе һин ниндәй маҡсат менән һайлауыңа ла бәйле. Ә маҡсатты һайлағанда ҡайһы бер кешеләр буталып та китә. "Бәләкәй" маҡсатты - "ҙур", "ҙур"ын - "бәләкәй" тип уйлап та яңылыша әҙәм. Ҡайһы бер кешеләр беренсе урынға ҙур аҡсалы булыуҙы ҡуя, кемдәрҙер - машиналы, кемдәрҙер йортло булыуҙы өҫтөнөрәк күрә. Ҡайһы кеше: "Мин ғаиләм менән бәхетлемен", - тип, башҡа маҡсаттарын икенсе планғараҡ күсерә. Кемдер башҡа кешеләргә ярҙам итеүҙән йәм таба. Миңә ҡалһа, һинең төп маҡсатың - халҡыңа хеҙмәт итеү булған хәлдә, башҡа хыял-маҡсаттарың да еңелерәк тормошҡа ашасаҡ. Әлбиттә, һәр кем үҙенең төп маҡсатын үҙе билдәләй инде.

Бәхет нимә ул?

Кешеләр бер-береһенән йыш ҡына "Һин бәхетлеме?" тип һорай. Ә бәхет нимә ул? "Матур ғаиләң булыуы, туған теләндә һөйләшеүең, тыуған ереңдә йәшәүең һәм башҡалар - шул бәхет", - тибеҙ. Әммә бөтөн бәхеттәр араһында минең үҙемдең иң ҙур бәхетем бар. Хеҙмәт коллективыбыҙ менән бер йыйылған ваҡытта бәхет тураһында һүҙ сыҡҡас: "Иң ҙур бәхет - халҡыңа хеҙмәт итеп, хеҙмәтеңдең емешен күреү", - тигәйнем. Бөгөн дә шул һүҙҙәрҙе ҡабатлайым. Халҡындың фатихаһы, халҡыңдың рәхмәте - Аллаһы Тәғәлә рәхмәтенә тиң. Бындай бәхет һиңә икеләтә дәрт, дарман, көс, яңынан-яңы уңыштарға өлгәшергә этәргес бирә. Халҡына ысын мәғәнәһендә хеҙмәт итеүселәр генә донъялағы иң ауыр яулана торған бүләкте - халҡының рәхмәтенә өлгәшә...

Мин бер ваҡытта ла кешеләргә айырып ҡараманым. Минең менән бергә эшләүсеме ул, кәңәш һорап килеүсеме, кәңәш биреүсеме, ҡала урамында һүҙ ҡатыусымы - барыһы менән дә ихласлап һөйләшәм, һәр кемгә телефон номерымды бирәм. Әйткәндәй, һайлауҙар ваҡытында телефоным шылтыраусан өҙөлмәне. Әле лә шулай. Ғафури, Ауырғазы райондары һайлаусылары тарафынан депутат итеп һайланғас, бөтөн ғафуриҙарҙа, бөтөн ауырғазыларҙа ла минең телефон номерым бар. Әгәр халҡың һиңә таянып, шылтырата икән, был - халҡың менән бер тында йәшәүеңде, уның менән бер бөтөн, бер тамырҙан булыуыңды күрһәтә. Тамыр тигәндәй...

Уңыш тамырға бәйле

Был донъяла һәр нәмәнең яҡшымы, яманмы, нәҙекме, йыуанмы - тамыры бар. Сәскәнең дә, ағастың да, кешенең дә - үҙ тамыры. Барлыҡ тереклек тә тамырынан һут, көс ала. Кеше тамыры - уның ата-бабалары, тарихы. Бер тарихсы ағайҙың миңә әйткән бер һүҙе әле лә хәтерҙә: "Һин әллә кем булып йөрөмә! Уңыштарыңда һинең өлөшөң юҡ - һинең өсөн ата-бабалар эшләне, һиңә тамыр, ҡан бирҙе, шуны онотма!" - тигәйне ул. Ағай бик дөрөҫ әйтте, минеңсә. Мин үҙемдең тамырҙарымды яҡшы беләм. Әсәйемдең олатаһы Ғәлләм хәҙрәт революцияға тиклем Дини семинария ректоры булған. Уйлаһаң, уйылып китерлек бит: Күгәрсен районындағы Сапыҡ тигән ниндәйҙер бәләкәй генә ауылдан шундай ректор, сит илдә уҡып, өс тел белгән белемле кеше сыҡһын әле! Ғәлләм хәҙрәт булып китһен өсөн Ғәлләмдең атаһы ла хәҙрәт дәрәжәһендәге кеше булырға тейеш булғандыр бит. Юҡҡа ғына атаһы олатайҙы сит илгә 15 йылға уҡырға ебәрмәгәндер. Ул заманда беҙҙең олатайҙарҙың мөмкинлектәре киң, тамыры ныҡлы булған, тимәк. Беҙҙең нәҫелдә Зәки Вәлидиҙең комиссары дәрәжәһен үтәгән, "Түңәрәк өҫтәл", "Йәшелдәр" тигән китаптар яҙған (беҙ латин һәм ғәрәп графикаһы менән яҙылған ул китаптарҙы таптыҡ) ғалим, фән эшмәкәре, лидер Абдулла Ибраһимов - олатайымдың ҡустыһы ла бар. Ул Зәки Вәлидиҙең көрәштәше булғаны өсөн 1937 йылда иркенән мәхрүм ителеп, 1956 йылда ғына иреккә сығарыла...

Минән йыш ҡына: "Бал ҡорттары тормошонан нимәне беҙең тормошҡа күсерергә теләр инегеҙ?" - тигән һорау бирәләр. Ул һорауға ла яуап әҙер: ҡорттар тормошонан системалы ҡараштың тәжрибә итеп алыр инем. Күстең үҙенең "президенты" - ҡорттоң инәһе, хужабикәһе, ата ҡорттары, умартаны һаҡлаусы "һалдаттары", балалар ҡараған "тәрбиәселәре", табыш табырға сығып киткән иң һиҙгер "разведчиктары" һәм табышты ташыған эшсе ҡорттары бар. Сығып китергә уйлайҙар икән - дәррәү, күс менән сығып китәләр. Улар шулай уҡ тәбиғәт шарттарына ныҡ иғтибарлы. Күпләп умарталарына ҡайта башлаһалар, хәҙер оҙаҡламай ямғыр яуа, тип көтәләр тораһың. Шуға, бөгөн тормошта иң беренсе ҡорттарҙың ғаиләһендә булған системалы ҡараштың халыҡ тормошона, кеше тормошона күсерер инем.

Бәхет темаһына әйләнеп ҡайтайыҡ. Мин Башҡортостан ерендә, атай-әсәйемдең матур ғаиләһендә тыуыуым менән бәхетлемен. Атайым да, әсәйем дә - уҡытыусылар булды. Атайым - мәктәп директоры, беҙҙең синыф етәксебеҙ ине. Беҙ, балалары, һәр ваҡыт: "Эшебеҙ менән атайыбыҙҙың, әсәйебеҙҙең дәрәжәһенә тап төшөрмәйбеҙме?" - тип хафалана торғайныҡ. Атай-әсәй беҙҙе шул тиклем ныҡ тәрбиәләгән: ситкә сығып киткән саҡта ла үҙебеҙҙе атай-әсәй ҡанаты аҫтында һымаҡ итеп тоя инек, әле лә шулай тоябыҙ. Был беҙгә тормош һынауҙарын еңелерәк үтергә ярҙам итте. Мәскәүҙә юғары уҡыу йортонда уҡығанда ла, аспирантура тамамлағанда ла, ғилми эш менән булғанда, үҙемдең фән кандидаттарымды әҙерләгәндә лә, Мәскәүҙә Рәсәй Юғары аттестация комиссияһының экспертлар советы ағзаһы булған сағымда ла ата-әсәйемдән алған дәртте, тәрбиәне ныҡ тойҙом. Әйткәндәй, Мәскәү миңә бик ҙур һабаҡтар бирҙе, тормошҡа ижади кеше күҙлегенән ҡарарға өйрәтте. Әлбиттә, пионер, комсомол тәрбиәһен дә телгә алмай үтеү яҙыҡ булыр. Минең тамырҙарымды улар ҙа нығытты. Мәктәптә лә, юғары уҡыу йортонда уҡығанымда ла миңә комсомол сәркәтибе булырға тура килде. Ул йылдарҙағы эшмәкәрлегем өсөн бик күп маҡтау ҡағыҙҙары алдым...

Ғәҙел булырға кәрәк…

Билдәле поэма юлдары менән әйткәндә, был донъяла аҙашмаҫ өсөн ниндәй һуҡмаҡ менән барырға һуң? Ниндәй юлды һайларға? Уңышлы кеше булыр, уңышлы хеҙмәткәр булыр, халҡыңа файҙа килтерер өсөн әллә ниндәй хәтәр-хәтәр күрһәтмәләр буйынса йәшәргә лә кәрәкмәй. Бары тик ғәҙел булырға ғына кәрәк. Тәү сиратта намыҫың алдында ғәҙел бул. Шул саҡта һинең эштәреңә алға китер. Кеше, бая әйткәнемсә, был тормошта йыш ҡына хаталар ебәрә. Уйламаған ерҙә ҡотҡоға бирелеп, насар юлға ла баҫырға мөмкин ул. Мин спиртлы эсемлектәр ҡулланыу, тәмәке тартыу кеүек алама ғәҙәттәрҙе генә әйтмәйем. Уғрылыҡ тураһында һүҙем. Миҫал өсөн фән өлкәһен алайыҡ. Фәндә эшләүсе ысын ғалимдар бер ваҡытта ла урлашмай. Улар көнөн-төнөн эш, идея, алға китеш, һөҙөмтә тип саба. Ундай ғалим саңға батып, донъяһын онотоп, эш менән мәшғүл. Шундай ғилем эйәһенең өйөндә булырға тура килде бер мәл. Килеп инһәм, теге ғалим яп-ябай ғына фатирҙа аспиранттары менән шөғөлләнеп ултыра. Фатиры йүнләп йыйыштырылмаған да. Ул бер ҙә: "Әйҙәгеҙ әле һеҙ минең фатирымды йыйыштырығыҙ, миңә аҡса бирегеҙ, ә мин - диссертацияларығыҙҙы яҙып бирәм", - тимәгән бит! Рәсәйҙә ошо ғалим һымаҡ менталитетлы кешеләр күберәк булһа, илдең теге йәки был ҙур бер быуатҡа торошло проекттары, улар өсөн бүленгән аҡсаны урлау арҡаһында, "ҡомға терәлмәҫ" ине. Әлбиттә, кешегә йәшәр, туҡланыр, кейенер өсөн аҡса кәрәк. Әм-

✓ *Башҡортостанда башҡорт балы ғына иң данлыҡлы бренд булып тормай - уның ошо ерҙә үҫкән бар йәшеллеге бренд булып тора. Башҡортостан үҙенең нефте менән генә бай түгел - ере менән дә, ерҙә үҫкән продукцияһы менән дә бай.*

мә аҡса эшләүҙе беренсе урынға ҡуйырға ярамай. Минең үҙемә бер көн килеп: "Ижади эште һайлайһыңмы, әллә аҡсалы, әммә ижади булмаған эштеме?" - тип һорашалар, мин мотлаҡ рәүештә тәүгеһен һайлар инем.

Башҡорт дәүләт ауыл хужалығы институтының "Зоотехния" бүлеген тамамлағас, 1985-1988 йылдарҙа Бөтә союз малсылыҡ буйынса фәнни-тикшеренеү институтында аспирантурала уҡып ҡайттым да, 1988-1992 йылдарҙа Башҡортостан малсылыҡ һәм аҙыҡ етештереү буйынса фәнни-тикшеренеү проект-технология институтында эшләнем. Дәрт тә, дарман да ташып торған саҡ. Үҙемдең барлыҡ мөмкинлегемде эшкә егеү өсөн фермерлыҡ хәрәкәтенә ҡушылдым. Был өлкәлә эшләү миңә бик күп һөнәри һабаҡ бирҙе. 1992-1996 йылдарҙа үҙем етәкләгән 500 га майҙаны булған "Элита" фермер хужалығында етештерелгән 9 төр иген культураһы республикала уңышлы файҙаланыла башланы. Был культуранан гектарынан 45 центнерға тиклем мул уңыш алынды. Унан һуң ике йыл Башҡортостан малсылыҡ һәм аҙыҡ етештереү буйынса фәнни-тикшеренеү проект-технология институтында ҡортсолоҡ лабораторияһы мөдире булдым. 1998 йылдан 2003 йылғаса Башҡортостан ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры, унан - бөгөнгәсә - генераль директор вазифаһын башҡарам.

Мәскәүҙә үткән "Алтын көҙ" күргәҙмәһендә 100-ләгән миҙал алғайныҡ, күптәр быға аптырауын йәшермәй, беҙҙән тәжрибә уртаҡлашыуыбыҙҙы үтенә. Ә быныҡ сере ябай ғына: алдараҡ әйткәнемсә, фән етештереү файҙаһына эшләргә тейеш. Шул сағында тәжрибә лә була. Ҡайһы бер ойошмалар эштәренә ижади ҡарамайҙармы, фәнде ғәмәлдә ҡуллана алмайҙармы, беҙҙең һымаҡ мул уңышҡа өлгәшә алмайҙар. Ә беҙҙә фән дә, етештереү ҙә, тауарҙы һатыу ҙа яҡшы эшләй. Фән өлкәһе тап шулай эшләргә тейеш тә.

Ҡытайҙар менән бәйләнеш

Былтыр ноябрь айында беҙ, Башҡортостан делегацияһы, эш сәфәре менән Ҡытайға барып ҡайттыҡ. Ҡытайҙың йылдам үҫеүен барыбыҙ ҙа ишетеп беләбеҙ. Ысынлап та, шулай булып сыҡты: бар ерҙә йәнлелек, бар ерҙә хәрәкәт, үҫеш. Ысын үҫеш хөкөм һөрә. Тәртип тә яҡшы. Урындағы коллегалар менән аралашып, тәжрибә уртаҡлашып, матур тәьҫораттар менән Башҡортостанға ҡайттыҡ. Үҙем өсөн Ҡытай тураһында яһаған һығымталарымдың береһе шул булды: ҡытайҙар беҙҙең халыҡтан бер яғы менән дә айырылмай. Белем яғынан Рәсәй халҡы алдараҡ та тора хатта. Ә улар ни өсөн алға киткән? Сөнки, уларҙа системалы ҡараш көслө. Теләһә ҡайһы ойошманы, предприятиены алып ҡара - барыһы ла бер бөтөн булып эшләй, һәр кем ошо системаға үҙ өлөшөн индерә, үҙ эшен, ул эштең мөһимлеген белеп, аңлап башҡара. Уларҙа системаның бер өлөшө булараҡ, һәр ойошма нисек эшләргә тейеш, тигән аңлау бар. Эйе, уларҙа ҡанундар ҙа көслө, урлашҡан кешеләрҙе барлыҡ халыҡ алдын сығарып атырға ла мөмкиндәр. Тәртип булһын өсөн уныһы ла кәрәктер, бәлки. Ә беҙҙең ил шундай аҡыллы кешеләребеҙ, тәбиғи байлыҡтарыбыҙ була тороп, алға китә алмай. Сөнки беҙҙә эшкә тап системалы ҡараш юҡ. Ә бит Рәсәй халҡы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уйларға һәм эшләргә һәләтле. Донъялағы иң көслө компьютер белгестәренең 30 проценты - беҙҙекеләр. Хакерҙар һуң! Ә компьютерҙар Рәсәйгә Европа, Америкаға ҡарағанда һуңыраҡ индерелде. Бөгөн күпме ғалимдарыбыҙ ситтә эшләй.

Минән йыш ҡына: "Бал ҡорттары тормошонан нимәне беҙең тормошҡа күсерергә теләр инегеҙ?" - тигән һорау бирәләр. Ул һорауға ла яуап әҙер: ҡорттар тормошонан системалы ҡарашты тәжрибә итеп алыр инем. Күстең үҙенең "президенты" - ҡорттоң инәһе, хужабикәһе, ата ҡорттары, умартаны һаҡлаусы "һалдаттары", балалар ҡарағаны "тәрбиәселәре", табыш табырға сығып киткән иң һиҙгер "разведчиктары" һәм табышты ташыған эшсе ҡорттары бар. Сығып китергә уйлайҙар икән - дәррәү, күс менән сығып китәләр. Улар шулай уҡ тәбиғәт шарттарына ныҡ иғтибарлы. Күпләп умарталарына ҡайта башлаһалар, хәҙер оҙаҡламай ямғыр яуа, тип көтөп тораһың. Шуға, бөгөн тормошта иң беренсе ҡорттарҙың ғаиләһендә булған системалы ҡарашты халыҡ тормошона, кеше тормошона күсерер инем.

Һәр үҫемлек - байлыҡ

Башҡортостан еренең уңдырышлылығына минең иҫем китә. Шундай риүәйәт тә бар бит: йәнәһе, Алла төрлө халыҡтарға ер тараҡан ваҡытта башҡорт Унан ер һорарға баҙнатһыҙланып тора икән. Батырсылығы етеп, үҙенә өлөш һорарға тәүәккәллек иткәнсе, ерҙәр өләшеп бөтөлгән. Шунан Алла үҙенә ҡалдырған ерҙәрҙе башҡортҡа биргән. Ул үҙенә иң һәйбәт ерҙәрҙе ҡалдырған булған бит инде. Бына шуға ла Башҡортостан халҡы шундай уңдырышлы, шундай гүзәл ерҙә йәшәй.

Мәскәүҙә уҡыған ваҡытта шуға иғтибар иттем: унда ҡыярҙарҙы теплицаһыҙ үҫтереп булмай. Һауа ныҡ дымлы. Ҡышын минус 18 градус булдымы - ныҡ һыуыҡ. Фермер булын эшләгән ваҡытта Омскиға бойҙай орлоҡтары алып ҡайтырға барғайным. Юл буйлап ҡитеп барам Себер яғына - юлдың ике яғынан һаҙлыҡтарҙан башҡа бер нәмә күренмәй. Ә беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙың һәр яланы, унда үҫкән һәр үләне байлыҡ. Башҡорт еренең бренды - башҡорт балы, ул беҙҙең визит карточкабыҙ, тибеҙ. Әлбиттә, ул шулай. Әммә мин, ауыл хужалығы хеҙмәткәре булараҡ, шуны ла өҫтәр инем: беҙҙең 96 процент бал - тәбиғәттә үҫкән сәскәләрҙән алынған. Шул уҡ сәскә-үләндәрҙе һыйырҙар ашап, беҙгә һөт бирә. Шул уҡ ерҙә аттар йөрөп, үлән утлап, ҡымыҙ бирә. Йылҡы ите бирә. Шуға, мин әйтер инем: Башҡортостанда башҡорт балы ғына иң данлыҡлы бренд булып тормай - уның ошо ерҙә үҫкән бар йәшеллеге бренд булып тора. Башҡортостан үҙенең нефте, химияһы менән генә бай түгел - ере менән дә, ерҙә үҫкән продукцияһы менән дә бай. Шуға ла төрлө өлкәлә эшләгән ғалимдарыбыҙҙың һәр береһе үҙ йүнәлешен алға әйҙәһен, һәр йүнәлеш Рәсәйҙә лә, донъяла ла бренд кимәленә күтәрелһен ине, тип теләйем. Башҡортостандың үҙ халҡын һәм иҡтисадын күтәрер өсөн хәле лә, мөмкинлектәре лә, тәбиғи шарттары ла бар.

Балға тиңләшкән нимә бар?

Сит ерҙәрҙә күп йөрөйбөҙ, күпте күрәбеҙ, шуға ла минән, унда балға тиң ниндәй ризыҡ бар, тип һорағандары бар. Мин сит илдәрҙә балға тиң тәмле лә, шифалы ла ризыҡты осратманым. Беҙ Үҙәктә 200-ҙән ашыу яңы продукция етештерәбеҙ. Улар донъя кимәлендә бөтәһе лә конкурентлыҡҡа һәләтле. Теләһә ҡайһы тауарҙы ҡулға тотоп: "Бына бит шәп тауар!" тип әйтергә була. Бөгөн күптәр сит илдә йәшәүселәр аҡыллы, тигәнгә инанған. Әммә беҙ ҙә уларҙан ҡалышмайбыҙ, тип уйлайым мин. Беҙ, ауыл балалары, прополис нигеҙендә шундай продукциялар эшләнек! Хәҙер Сәғүд Ғәрәбстаны менән бергә һитә нигеҙендә продукциялар етештерергә килештек. Беҙҙең ниндәй генә тауарҙы алма - уның донъя кимәлендә тиңе юҡ. Аҡылыбыҙ, мөмкинлегебеҙ бер кемдән дә кәм түгел, тимәк. Беҙгә Хоҙай аҡыл да биргән, ҡан да биргән. Уны кәрәк йүнәлештә ҡулланырға ғына кәрәк.

ЙОМҒАҠЛАП...

Һөйләшеүебеҙ аҙағында шулай ҙа "Уңышлы булыу өсөн үҙең һайлаған һөнәрҙең фанаты булырға кәрәкме?" тигән һорауымды бирергә батырсылыҡ иттем. "Юҡ, мин фанат түгел. Мин был йүнәлеште үҫтереүҙе аңлы рәүештә тормош маҡсатым итеп алдым, сөнки умартасылыҡ башҡорт халҡының төп шөғөлө лә, мәҙәниәте лә, тарихы ла ул. Был - ауыл хужалығы йүнәлеше генә түгел, ә республика өсөн сәйәси йүнәлеш тә, тип ҡараным. Унан һуң, был тармаҡты донъя кимәленә күтәрәбеҙ икән, Башҡортостанды, башҡорт халҡын да донъя кимәлендә танытабыҙ бит..."- тине Әмир Миңнеәхмәт улы. Уның был һүҙҙәре башҡа һорауға, "Илһөйәрҙәр ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?" тигәнгә яуап булып яңғыраны.

Илгиз ИШБУЛАТОВ әңгәмәләште.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

ЯЛҠАУ БУЛМАҺА,

йәштәр ҙә шөғөл таба ала

"Бөгөнгө көн йәштәре ялҡау, үҙҙәрен генә уйлап йәшәүсе эгоистар" һәм башҡа ошондай һүҙҙәрҙе оло быуын ауыҙынан йыш ишетергә тура килә. Ләкин тирә-яғыбыҙға иғтибарлыраҡ күҙ һалайыҡ әле. Ысынлап та барлыҡ йәштәребеҙҙе лә ошо ҡалыпҡа һалып буламы? Эргәгеҙҙәге үҙҙәрен әҙәпһеҙ тотҡан, бөгөнгө көн менән генә йәшәүсе, ихтирам, иғтибар төшөнсәһе ят булған бер-нисә кешегә ҡарап ҡына барыһы хаҡында ла фекер йөрөтөү дөрөҫмө? Минеңсә, юҡ. Әлеге хатымды мин йәштәрҙең "ялҡаулығын, эш һөймәгән быуын" булыуҙарын инҡар итеү маҡсатында яҙырға булдым. Бер ыңғайға, йәштәштәремә аҡса эшләү юлдарын да өйрәтмәксемен.

Әлеге көндә мин университеттың бишенсе курсында белем алам. Буласаҡ һөнәрем - тәржемәсе. Сит телдәр менән бала саҡтан ҡыҙыҡһыныуым һәм өйрәнеүем миңә бөгөндән үҡ инглиз, француз һәм немец телдәренән тәржемәсе булып эшләү мөмкинлеге бирә. Һәм мин уҡыуыма зыян булмаһын өсөн рәсми рәүештә ҡайҙалыр эшкә урынлашмаһам да, был мөмкинлектәремде файҙаланам һәм стипендияма ҡуш булырлыҡ аҡса эшләйем. Атай-әсәйемдән аҡса алмайым, ятаҡ өсөн дә үҙем түләйем, ашау-кейенеү ҙә үҙ кеҫәмдән.

Шулай уҡ бүлмәләш ҡыҙҙар менән яҙ миҙгелендә лә кеҫәбеҙҙе ҡалынайтып ҡалабыҙ. Юлы ябай. Яҙ етеп, көндәр йылый башлау менән ҡала кешеләре баҡса, дачаларына юллана. Ләкин оҙайлы ҡыштан һуң баҡса өйҙәрен йыуыу, биләмәне тәртипкә килтереү һәр кемдең дә, мәҫәлән оло йәштәгеләрҙең, ғәриптәрҙең хәленән килмәй. Шулай уҡ мөмкинлектәре булып та ваҡыттары ҡыҫынҡы булғандар ҙа күп. Һәм барлыҡ был эштәрҙе башҡарып сығырға елкәләре йоҡа булыусылар ҙа быуа быуырлыҡ. Ошондай осраҡтарҙа улар беҙҙең хеҙмәттәр менән файҙалана. Беҙгә, эш рәтен белеп үҫкән ауыл балаларына, быныҡ бер ҡыйынлығы ла юҡ. Киреһенсә, тынсыу бүлмәнән сығып, саф һауала эшләп алыу үҙе бер байрам. Етмәһә, арыу ғына килем дә килә. Бындай "бизнесҡа" инеп китеү өсөн бер тапҡыр сифатлы эш күрһәтеү ҙә етә. Артабан хәбәр телдән-телгә күсеп, реклама эшләй. Әлбиттә, аҡса тип хәүефһеҙлек хаҡында ла онотмайбыҙ. Үҙебеҙ белгән йәки таныштарҙың дуҫтарына, туғандарына ғына йөрөйбеҙ. Бер миҙгелдә, кәмендә, 7-8 баҡса биләмәһен таҙартабыҙ. Был өлкәлә өсөнсө йыл эшләйбеҙ һәм үҙебеҙҙең даими клиенттарыбыҙ ҙа бар. Беҙҙең өс кешенән торған "бригада" барлыҡ баҡсаларға ла етешә алмай, шуға күрә, бәлки, башҡа студенттар ҙа беҙҙең миҫалдан сығып, ошондай эшмәкәрлек алып барырға тотонор.

Студенттар өсөн аҡса эшләүҙең киләһе ысулын сәнғәт академияһында уҡыусы дуҫым миҫалында бәйән итмәксемен. Талантлы кеше бар яҡтан да һәләтле була, тигәндәрен мин уға ҡарап әйтә алам. Ул бер нисә музыка ҡоралында уйнай, яҡшы уҡый, спорт менән шөғөлләнә, сәләмәт тормош алып бара һәм үҙенә етерлек аҡса ла таба. Уның эшмәкәрлеге балаларға ҡурай, баян, саксофон, фортепиано һәм аккордионда уйнау серҙәренә төшөндөрөүгә ҡайтып ҡала. Уҡыуынан буш ваҡытында ул ҡаланың төрлө райондарына барып, балаларға өйҙәрендә музыкаль инструментта уйнарға өйрәтә. Шулай уҡ ошо инструменттарҙы көйләү һәм йүнәтеү кеүек хеҙмәттәрҙе лә башҡара. Үҙ көсө менән машина һатып алыуы килеменең яҡшы ғына булыуы хаҡында һөйләй.

Рәссам һөнәрен үҙләштереүсе танышым заказ буйынса портреттар төшөрә. Шулай уҡ офис, өй һәм фатир стеналарын, түбәләрен хәҙерге ваҡытта модалы булған һәм ҙур һорау менән файҙаланған 3-D һүрәттәр менән биҙәй. Уның да һәр саҡ кеҫәһендә аҡсаһы була, тимәк, һәләтенең файҙаһын күрә.

Ә ҡар көрәп, машина йыуып, бала ҡарап, фото төшөрөү хеҙмәте күрһәтеп, гәзит таратып, курьер булып йөрөп, әйберҙәр тегеп йәки бәйләп һатып һәм башҡа бик күп төрлө ысулдар менән аҡса эшләүсе йәштәребеҙ хаҡында сурытып яҙып тормайым. Улар бар һәм бик күптәр. Яҡшы итеп уҡыйҙар ҙа, үҙҙәренә етерлек аҡса ла эшләй беләләр.

Айгөл САФИНА.

✓ ***Бик ярҙамсыл хеҙмәттәше. Таңнамаҙҙан йортона килеп, тәҙрә аша ҡул иҙәүе менән тышҡа сығырға өндәгән бригадиры Кәримде күргәс, тиҙ генә кейенеп сыҡты. Кәримгә йомошон аңлатырға бер минут ваҡыт етте.***

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ

ХОҘАЙ БИРГӘН МАЛАЙ*

(Хикәйә)

* * *

Талпыныуы сикһеҙ, ниәттәре ҙур булһа ла, маҡсаты ҡолас етмәҫлек, үрелеп ҡарайым тигәндә генә лә баштан кәпәс төшөп китмәле ине шул. Кәрим тәүлек әйләнәһенә ҡырҡҡа ярылып эшләһә лә, биш йыл эсендә ундайын машина һатып алырлыҡ аҡса туплай алмай. Береһен-береһе ҡыуалап үҫеп килгән ҡыҙҙарын да ҡарарға кәрәк. Ҡыҙҙар наҙлы, әммә ана шул наҙ өсөн дә түләргә кәрәк шул. Ҡыҫҡаһы, малайҙарға ҡарағанда ҡыҙҙарҙы тәрбиәләп үҫтереү кеҫә йәһәтенән ауырыраҡҡа төшкәнен ҡыҙ үҫтергән генә белә. Етмәһә, Зөлхизә менән Зөбәйҙәләре бер-бер артлы мәктәпкә барҙы.

Ауылда күптән инде эш урындары юҡ, колхоз-совхоздарҙың ҡолағанына ла биш былтыр. Оҙаҡ уйлаһаң, бер нәмә лә килеп сыҡмай. Иң тәүҙә һөҙөү, шунан һуң ғына мөгөҙөңә нимә килеп эләккәнен байҡау лазым. Тәүәккәллек таш яра. Крәҫтиән балаһы крәҫтиәндәрсә эш итә инде. Тәүге йылында Кәрим ике йөҙ ҡаҙ себеше алып ебәрҙе, һимертергә өс баш башмағын айырып ҡуйҙы. Үҙенең һәм ауылдағы ташландыҡ ике өйҙөң картуфлыҡтарын силсәүиттән рөхсәт һорап һөрҙөрөп, өсөһөнә лә мансылдырып картуф сәсте. Себеште көҙ һанайҙар. Ҡырпаҡ ҡар яуыуға хужа усында төйөрөм генә аҡса барлыҡҡа килгәнен тойҙо. Тик был аҡсаһын ул кеҫәһенә, күптәр кеүек банкҡа һалып ҡуйырға ашыҡманы. Аҡса аҡса эшләргә тейеш. Икенсе йылына ҡаҙ себештәренең, һимертергә ҡуйылған башмаҡтарҙың һаны ике тапҡырға артып китте. Ҡаҙҙар һәм башмаҡтарына ем, көрпә алырға ла аҡсаһы етте.

Тап ошо мәлдә ҡасандыр алынып онотолған пай ере барлығы Кәримдең иҫенә төштө. Хәҙер инде ул картуфлыҡтар менән ваҡланып торманы. Пай ерен күрше ауылдағы фермерҙы яллап һөрҙөрөп, уның техникаһы менән картуфын да сәстереп ҡуйҙы. Хәләл көс менән табылғандың ҡәҙерен белә Кәрим. Ҡаҙҙары менән башмаҡтарын һуйып, ваҡлап һатты. Ауылға килеп күмәртәләп ит йыйып йөрөүселәргә әйләнеп тә ҡараманы. Ҡаҙарға ит һатырға үҙе сыҡты. Йыйып алған картуфын ҡалалағы комбинаттың етәкселеге менән һөйләшеп бер юлы тапшырҙы. Комбинаттың йөк машиналары тейәп алып китте уңышын.

Ҡырпаҡ ҡарҙа түбәһе күккә тейҙе. Кәрәкле сумманың ярты һынан күберәге тупланды ҡулына. Буйтым ғына. Яҡынса иҫәбе буйынса тағы бер йыл ынтылһа, алдағы йылда "Крузак" ихатаһында балҡып ултырасаҡ. Әлеге аҡсаһы ҡулдан да ундайын машинаны алырға етерлек. Әммә был йәһәттән Кәримдең үҙ һүҙе лә бар: кәләште - ҡыҙҙан, машинаны - нулдән.

Малдар ҡышҡа ҡураға ингәс, тик ятырға күнекмәгән Кәримдең күҙенә гәзиттәге бер иғлан салынды. Бер бай ғына миллионермы-миллиардермы, олигархмы-ала ҡараҡмы, яҡындағы ҡалала сауҙа үҙәге төҙөргә эшселәр йыя. Төҙөлөшкә сварщиктар талап ителә икән. Кастинг тигән нәҫтәкәй менән алалар икән. Оҙаҡ уйлап торманы, китте шунда. Ҡулы эш белгәс, моңмо ни? Тимерҙе төрлөсә иретеп йәбештереп ярыштылар. Заявка биргән алтмышлап дәғүәсенән эшкә ҡабул ителгән бишәүҙең береһе Кәрим булып сыҡты. Ул эшкә көн һайын ауылдан үҙ машинаһында йөрөнө. Ике ҡулына бер эш. Алтын ҡуллы тырыш эшсене шундуҡ күреп тә алдылар. Үҙен иретеп йәбештереүселәрҙең бригадиры итеп тәғәйенләп ҡуйҙылар. Тәүге айҙарҙа хужа алдан вәғәҙә иткән эш хаҡының яртыһын ғына түләп килде лә, егеттәрҙең ышаныслы булыуы һыналғас, ҡалған сумманы ла бер юлы иҫәптәренә күсерҙе. Иш янына ҡуш булды Кәримдең көтмәгәндә ошо төҙөлөш бригадаһында эш башлауы. Был шөғөлө уға билдәләгән маҡсатына тиҙерәк барып етергә ярҙам итәсәк.

Әммә донъя бер алдын, бер артын күрһәтә тигәндәй, алдағы йәйҙең ҡоро килеүе, шул сәбәпле фуражҡа хаҡ артыуы, бесән наҡыҫлығы бәкәлгә һуҡты. Ауыл халҡы малын күмәртәләп һуйып, баҙарға тултырҙы һәм иткә хаҡ төштө. Картуф та йүнле үҫеп сыҡманы. Ҡатыны ҡыҙҙары менән көнө-төнө үҫентеләргә ҡоҙоҡтан һыу ҡойоп торһа ла, ямғырһыҙ, картуфтың картуфы ла ырап үҫмәй икән. Кәрим ергә һәм башмаҡтарҙың, ҡаҙҙарҙың тамағына һалған сығымдан саҡ-саҡ ҡына, утыҙ процент самаһы ғына артыҡ килем ала алды. Иҫәп тотҡан суммаһы килеп сыҡманы.

Уныһы ғына етмәгән, донъя, ил кимәлендә башланған иҡтисади көрсөк Кәримдең алдына тағы ла бөтөнләй көтөлмәгән ауырлыҡтар килтереп ҡуйҙы. Инфляция башланды. Бына-бына дефолт булырға тора, тиҙәр банктар хеҙмәткәрҙәре. Эштәр улайға китһә, Кәримдең өс йыл буйы ҡара тирен түгеп йыйған хәләл аҡсаһына "Крузак"тың үҙен түгел, бер тәгәрмәсен дә һатып алыу мөмкин булмаясаҡ. Ул сағында инде ер тырнап, йә сәсеңде йолҡоп иларға ғына ҡала.

Бер көн Кәрим эштән ҡайтҡас, һәр ваҡыттағыса киске ашҡа ултырҙылар. Ниңәлер ҡатыны Зөләйха иренең борсолоулы мәшәкәттәренә битараф һымаҡ тойолдо. Туҡтауһыҙ йылмая, көлә. Бер-береһен бығаса һүҙһеҙ ҙә аңлай ине улар. Ир ҡырҡҡа ярылырҙай булып йөрөгән саҡта ҡатыныңың бындай ҡыланышын ни-мәгә юрарға ла белмәне. Был йәһәттән Кәрим яңылышмаған булып сыҡты. Зөләйха өҫтәл артынан тороп киткән ҡыҙҙарының ҡайһыһы ҡайҙа йүнәлгәнен көтөп кенә ултырҙы ла, үҙенең сәйер хәләтенең серен асып һалды.

- Кәрим, бөгөн район үҙәгенә барып, табипҡа күренеп килдем...
- Ауырыйһыңмы ни?
- Юҡ та...
- Атыу?
- Шул, мин тағы ла ауырға ҡалдым...
- Нимә?
- Ауырға ҡалдым, тием. УЗИнан ҡараныҡ...
- Кем?
- Ҡыҙ...
- Нимә?
- Нимә түгел, кем. Тиҙҙән ҡыҙыбыҙ була...
- Ҡасан тиҙҙән?
- Ғинуарҙа...
- Ниңә һин был хаҡта миңә иртәрәк әйтмәнең? Юҡ, ниңә иртәрәк ауырға ҡалманың?

Ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙәренең мәғәнәһе хаҡында аңларлыҡ хәлдә түгел ине Кәрим. Ул тәүҙә туҡтауһыҙ көлөргә тотондо ла, аҙаҡ ҡатынын бәпәй һымаҡ күтәреп, өй буйлап күтәреп йөрөтә башланы. Үҙе туҡтауһыҙ һөйләнде.

- Аптыранам был ҡатынға: Ҡыҙ таба ла, ҡыҙ таба. Һин тимен, малай хаҡында Докторға барып ҡара...

Ғаиләләре өсөн лозунгҡа әүерелгән был шиғырҙы артабан Зөләйха дауам итте:

- Аптырағас, роддомға Үҙең бараһыңмы ни? Ҡатын тапмаған малайҙы Үҙең табаһыңмы ни?

Шиғри әйтеште Кәрим дауам итте:

- Бында ҡыҙҙар фермаһы юҡ, Өй тултырма ҡыҙ менән. Ҡыҙға ҡарап тораһым юҡ, Малай кәрәк бер тигән...

Уларҙың кинәйәле итеп ирәүән шаярышыуын ҡыҙҙары ла күреп ҡалды. Тәүҙә төпкө бүлмәлә телевизор ҡараған Зөлхизә менән Зөбәйҙә улар янына йүгерешеп сыҡты. Ҡыҙҙар аталары менән әсәләренең алмаш-тилмәш һөйләгән шиғырынан шуны аңланылар: тиҙҙән уларҙың тағы ла бер һеңлеләре донъяға киләсәк. Һеңлекәштәре Зөлхәбирә, Зәлифә, Зөмәрә тыуыр алдынан да улар тап ошо шиғырҙы һөйләгәйне. Бер аҙҙан тыштан бәләкәй һеңлеләре йүгерешеп килеп инде. Айыу бейетәләр тиһеңме? Улар ишектән килеп инделәр ҙә, әсәләрен күтәргән аталарын күреп, ишек төбөндә йомош һорап ингән балаларҙай ҡатып ҡалдылар. Бер аҙҙан ғаиләләге шатлыҡлы яңылыҡ уларға ла мәғлүм булды. Мәктәптә уҡыусы Зөлхизә менән Зөбәйҙә тиҙҙән донъяға киләсәк туғандарының әсәләренең эсендә икәнлеген беләләр ине инде. Тик береһенән-береһе бәләкәс Зәлхәбирә, Зәлифә һәм Зөмәрә кескәй туғандарын Һаҡмарҙан тотоп алалар тигәнгә ышанғас, был хәлгә тик үҙҙәренең йәшенә ярашлы кимәлдә генә ҡыуандылар, булһа кәрәк. Кис ятҡас, Кәрим менән Зөләйха алтынсы ҡыҙҙарына йола буйынса "З" хәрефенә башланған исем эҙләп, Зарина тигәндә туҡталырға булдылар. Ҡыҙҙарҙың тыуасаҡ һеңлеләренә ҡаршыларға нисек әҙерләнеүен күҙәтеүе оло бер кинәнес ине. Кемдер нимәйҙер уйынсығын бер кем дә белмәгән ергә йәшерә, икенселәре кейем хәстәрләй, кәнфит, печенье, һағыҙ запаслай.

Кәрим көн аша тиерлек ҡалалағы машиналар һатыла торған үҙәккә барып, үҙе һатып аласаҡ машинаның хаҡын һорашып-белешеп торҙо. Бер көн барғанында уға үҙәктәге дилерҙар ике айҙан машинаға хаҡтың ун процентҡа, өс айҙан утыҙ процентҡа артасағы хаҡында хәбәр итте. Кәрим йығылып китә яҙҙы. Машинаға аҡсаһын тултырыр өсөн, бик теләмәһә лә, кредитҡа алырға тура киләсәк уға. Банкҡа йүгереп барҙы. Унда ла ажиотаж. Офиҫка яҡын барырлыҡ түгел. Ярты көн буйы сиратта торҙо. Көтөүе бушҡа ғына булды. Дефолт алдынан ниндәй банк кредит өләшһен инде? Уға ике-өс айҙан, йәғни һумдар нисбәте кинәт һикереш яһағас ҡына килергә ҡуштылар.

Кәрим булған барлыҡ аҡсаһының яртыһын долларға, яртыһын евроға алыштырып алды ла, ауылына ашыҡты. Юлда ла, ҡайтҡас сәй эскәндә ҡатыны менән һөйләшкәндә лә, ҡайҙан аҡса табырға, тигән уй башынан сыҡманы. Ауылдағы барлыҡ туғандарын, дуҫтарын күҙ уңынан үткәреп сыҡтылар. Тик ауыл кешеһенә тотош капитал булып тойолған байтаҡ ҡына сумманы һорап алып торор кешене генә иҫләй алманылар. Дефолт алдынан кем кемгә аҡса бирep торһон инде? Барыһы ла барлы-юҡлы аҡсаларына нимәлер алып ҡалырға, күсемһеҙ милеккә әйләндерергә тырыша.

Теге саҡта ҡатынының ауырлы икәнлеген тәүләп ишеткән көндө Кәрим көтмәгәндә, үҙе лә һиҙмәҫтән Зөләйханан "Ниңә иртәрәк ауырға ҡалманың?" тип һорауы юҡтан ғына түгел ине. Ысынлап та, әгәр ҙә ҡатыны тап ошо көндәрҙә бала тапҡан булһа, машина өсөн ҡалған аҡса мәсьәләһен Әсәлек капиталы менән хәл итерҙәр ине. Ошо хаҡта уйлауы булды, Кәрим ултырған еренән һикереп торҙо.

- Әсәһе, миңә мул ғына итеп күстәнәс әҙерләп бир әле. Бер сирек бал, ике ҡаҙ һал. Мин иртәгә үҙем менән алып китәм...

- Ярар, әҙерләрмен. Сер булмаһа, кемгә ул күстәнәс?

- Әлегә сер. Килеп сыҡһа, үҙеңә генә әйтермен...

- Бигерәк ҡыҙыҡһың да инде һин, Кәрим...

- Ҡыҙыҡмын шул. Алла бойорһа, иртәгә "Крузак" менән ҡайтып төшһәм, тағы ла ҡыҙығыраҡ булыр...

Үҙе менән бер бригадала эшләүсе Ғәлләмгә таң һарыһынан китте Кәрим. Ул район үҙәгендә йәшәй ине. Бик ярҙамсыл хеҙмәттәше. Таңнамаҙҙан йортона килеп, тәҙрә аша ҡул иҙәүе менән тышҡа сығырға өндәгән бригадиры Кәримде күргәс, тиҙ генә кейенеп сыҡты. Кәримгә йомошон аңлатырға бер минут ваҡыт етте.

Ғәлләмдең бер туған ағаһы Ғәлим Сынбулатов район дауаханаһында баш табип булып эшләй. Кәримдең йомошо тап унда ине. Сынбулатовтың йортона киттеләр. Ғәлләм ағаһының йортона үҙе инеп китте. Ингән ыңғайы кире килеп тә сыҡты. Ағаһы иртүк эшенә киткән икән. Дауаханаға йүнәлделәр. Кәрим хеҙмәттәшенә ағаһына тигән күстәнәсте тоторҙо ла, коридорҙа ултырып ҡалды, Ғәлләм баш табиптың бүлмәһенә инде. Оҙаҡ ҡына һөйләштеләр. Балҡып килеп сыҡты Ғәлләм. Кәримдең ҡулын ҡыҫты ла:

- Ағайымды көскә күндерҙем. Тик ул һинең үҙең менән һөйләшкеһе килә. Бар...

(Дауамы. Башы 23-сө һанда).

* *Хикәйәгә тормошта булған ике ваҡиға нигеҙ итеп алынды*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

Һуңғы йылдарҙа киң мәғлүмәт сараларында башҡорт телен донъя кимәленә, атап әйткәндә, интернет донъяһына сығарыу тураһында йыш фекер алышына. Был хаҡта беҙҙең гәзиттә лә, башҡа милли баҫмаларҙа ла мәҡәләләр даими урын ала килә. Хәҙерге көндә интернетта башҡорт телен танытыуға күп көс һалыусы "Википедия" ирекмәндәре Рөстәм Нурыевты, Гүзәл Ситдыҡованы, Илдар Кинйәбулатовты һәм башҡаларҙы гәзит уҡыусы яҡшы белә. Бөгөн һүҙебеҙ компьютерҙа программалар "яҙыу" менән шөғөлләнеүсе Руслан СӘЙФУЛЛИН исемле егет тураһында. Руслан күптән түгел Санкт-Петербург ҡалаһында үткәрелгән "IT-Планета"-2014/2015 VIII халыҡ-ара олимпиадаһында ҡатнашып, "Иң яҡшы ирекле диплом" номинацияһында үҙе төҙөгән "Браузер клавиатураһы" ("Brouser keyboard") программаһы менән беренсе урын яуланы. Русландан әлеге олимпиада тәьҫораттары, үҙенең программаһы, интернет донъяһында башҡорт телен танытыу юлдарын нисек күреүе тураһында һөйләүен һораныҡ.

БАШҠОРТ ТЕЛЕН...

интернет донъяһында танытыусы

➔ Һинең диплом проектың, программаң ниҙән ғибәрәт? Ни өсөн һин тап ошо программаға тотонорға булдың?

- Интернетҡа беҙ "Опера", "Гугл-Хром", "Мозила-Файрфокс" һәм башҡа төрлө программалар (браузерҙар) аша инәбеҙ бит инде. Минең шәхси компьютерҙар өсөн тәғәйенләнгән "Brouser keyboard" тигән программам ошо браузерҙарҙа өҫтәмә рәүешендә уйлап сығарылды. Ул башҡорт теленә күсеп, беҙҙең телдә яҙыу мөмкинлеге бирә. Был программаны киоскыларҙағы аҡса һалыу терминалдары өсөн дә ҡулланырға була. Уның сенсорлы экрандарҙа ҡулланыла торған клавиатураһы ла бар.

Программаның актуаллегенә килгәндә, уны эшләгәндә күптәрҙең компьютерында башҡорт теле көйләнмәгән булыуын иҫәпкә алдыҡ. Кемдеңдер операцион системаһы яңы түгел, кемдер өс тел (инглиз, рус һәм башҡорт) араһында күсеп йөрөү оҙаҡ, артыҡ мәшәҡәтле, тип, башҡорт телен компьютер теленә ҡуйырға теләмәй. Кем, алдараҡ әйткәнемсә, терминалдарҙа экран клавиатураһында башҡортса яҙышырға теләй - шулар өсөн кәрәкле был браузер өҫтәмәһе. Гәрсә, был программала биш телдә: башҡорт, рус, инглиз, сыуаш һәм татар телдәрендә яҙышыу мөмкинлеге бар. Әйтәйек, сыуаш теле әле бер операцион системаға ла индерелмәгән. Сыуаштар өсөн дә был программа уңайлы.

Бынан ике йыл элек дәртләнеп китеп интернетта "китапхана" төҙөп ҡарағайным, әҙерлегем етерлек булмағанмы - был эште аҙағынаса еткерә алмай, ташлап ҡуйҙым. Шунан клавиатура төҙөнөм. Уны башҡорт программисы, веб-дизайнер Илдар Кинйәбулатов күреп ҡалды ла: "Ә уны браузарға өҫтәмә формаһында эшләп булмаймы?" - тип, миңә яңы идея бирҙе. Шулай итеп, сентябрь айында клавиатураны браузерҙарға ултыртыу буйынса эш башланым. Бихисап техник проблемаларҙы хәл иткәс, 7 май көндө "Опера"ға, унан аҙаҡ "Гугл-Хром"ға урынлаштырҙым. Әйткәндәй, "Гугл-Хром"ға ҡуйыу өсөн дә бер-нисә мәсьәләне хәл итергә тура килде. Өҫтәмәне күптән түгел "Мозила-Файрфокс"ҡа ла урынлаштырҙым. Браузер клавиатураһын әлегә бер ерҙә лә рекламаламаһам да, интернетҡа ҡуйған көндән алып бер-нисә аҙна үтеүгә, уны 800-ҙән ашыу кеше үҙенә күсерҙе. Киләсәктә тағы ла киңерәк ҡолас менән уны таратырбыҙ, интернеттағы башҡорт төркөмдәренә лә мәғлүмәт бирербеҙ, тип уйлайым.

➔ Башҡорт телен интернет донъяһында тағы ла киңерәк файҙаланыу өсөн әлеге көндә ниндәйерәк йүнәлештәге проекттар тәҡдим итер инең?

- Милли проекттар һәр өлкәлә лә кәрәк инде ул. Мәғарифта булһынмы, һаулыҡ һаҡлауҙамы, иҡдисад өлкәһендәме, яңы мәғлүмәт технологиялары өлкәһендәме... Башҡорт теленә өйрәткән программаларға ҡытлыҡ айырыуса ҙур, минеңсә. Был юҫыҡта үҙ күҙаллауҙарым да бар. Әйтәйек, был электрон әсбаптар беҙ өйрәнгән китап формаһында ғына булмаһын, ә балаларҙы, йәштәрҙе ылыҡтырырлыҡ техник алымдар ҡулланып, интерактив формала эшләнһен ине. Һүҙлектәр йүнәлешендә лә эшләү кәрәк. Юғиһә, улар ҙа аҙ. Әлегә башҡортсанан - руссаға, руссанан - башҡортсаға тәржемә итеү сервисы ла юҡ, киләсәктә уны ла эшләү - башҡорт программистарының төп бурысы булырға тейеш. Әлбиттә, быныңөсөн бик күп көс түгергә тура килер әле...

➔ Санкт-Петербург ҡалаһында үткән "IT-Планета" халыҡ-ара олимпиадаһы тураһында ла һөйләп үт әле. Унда ҡатнашып, "Иң яҡшы ирекле диплом" номинацияһында еңеп сығыу һиндә ниндәй тәьҫораттар уятты?

- Олимпиада инде бер-нисә йыл рәттән уҙғарыла. Унда донъяның барлыҡ төбәктәренән юғары һәм профессиональ белем биреү учреждениеларында уҡыусы студенттар һәм дипломлы хеҙмәткәрҙәр ҡатнаша ала. Ярыштың һайлап алыу этабы ситтән тороп уҙғарыла. Йәғни, проекттар интернет селтәре аша ебәрелеп, махсус комиссия һынауы үтә. Мин үҙем, мәҫәлән, былтыр декабрь айында ебәрҙем эшемде. Күпмелер ваҡыт уҙғас, минең финалға үтеүем тураһында хәбәр килде. Юл сығымдарын, торлаҡ мәсьәләһен мин уҡыған Өфө Статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжы үҙ өҫтөнә алды. Мәғлүмәт технологиялары өлкәһендә бар донъяға билдәле Oracle, Cisco, D-Link, Huawei, 1C, Intel, NetApp, InterSystems, ГНУ/Линуксцентр компаниялары ҡанаты аҫтында үткәрелгән мәртәбәле ярышта еңеп сығыу, унда үткәрелгән оҫталыҡ дәрестәрендә булыу, ҡарау, үҙем һымаҡ йәш программистар менән танышыу, шул мөхиттә йәшәү - аңлатып булмаҫлыҡ тәьҫораттар бирҙе, әлбиттә. Төп ете номинацияның береһендә еңеүсе булыуыма килгәндә, хәҙер мин, ниндәй ҙә булһа эшкә тотоноп, уға бирелеп, тырышып эшләһәң, уңышҡа өлгәшеп була икәненә төшөндөм. Быйыл колледжды тик 4-5 билдәләренә генә тамамланым, көҙгә ҡарай веб-дизайн менән шөғөлләнгән берәй компанияға эшкә урынлашырға иҫәп бар.

ЙОМҒАҠЛАП...

Киләсәктә тағы ла яңы программалары менән ҡыуандырыр әле был егет. Ул бит, башҡорт, рус, инглиз теленән тыш, бөгөнгө заман өсөн бик актуаль "компьютер телен" дә яҡшы белә!

Иҙел РӘХИМОВ әңгәмәләште.

... көйөндөрә лә

ТАРИХ БЕҘҘЕ ҒӘФҮ ИТМӘҪ...

"Башинформ" агентлығында ойоштороlған сираттағы матбуғат конференцияһы былтыр Эстонияның Палдиски ҡалаһында Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән семинар материалдары йыйынтығын презентациялауға арналды.

Был сара ниндәйҙер кимәлдә йөрәктән сыҡҡан әрнеү ҙә, республика халҡына оран да булып яңғыраған булды. Сөнки делегация етәксеһе, Башҡортостан Милли музейы директоры Ғәли Вәлиуллин белдереүенсә, быйыл Юлай Аҙналиндың тыуыуына 285 йыл тула. Ләкин республика бөйөк батырҙың атаһының, уның көрәштәшенең юбилейын бөтөнләй "онотто". Ул ғына ла түгел, хатта Салауат Юлаевты ла хәтерҙән ҡыҫырыҡлап сығарып барабыҙ. Ғәли Фәйзрахман улы әйтеүенсә, юғары уҡыу йорттарының береһендә икенсе курс студенттарынан Салауат Юлаевтың кемлеген һорағас, 19 кеше араһынан ни бары бер генә студент уның тураһында ыңғай фекерҙә була. "Әгәр батырҙарыбыҙҙы үҙебеҙ пропагандаламаһаҡ, тиҙҙән рухи көрсөккә барып терәләсәкбеҙ, - тине Ғәли Фәйзрахман улы. - Бөгөн былай ҙа Крәҫтиән һуғышы етәкселәрен бандиттар һәм башҡа исемдәр менән кәмһетергә тырышалар, ләкин Салауат Юлаевтың донъяуи кимәлдәге феномены - уның ғәҙеллек көрәшсеһе булыуында һәм был хаҡта оноторға ярамай".

Сәфәргә килгәндә инде, Палдиски халҡының милли батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа мөнәсәбәте үҙенсәлекле - улар уның тураһында быуындан-быуынға үҙҙәре белгән тарихты тапшыра, Салауатты кенәз тип атай, уның рухын, әхлаҡи сифаттарын хәтерендә һаҡлай һәм ундағы мөхиттән Салауат рухы аңҡый, әйтерһең дә, батыр һаман да эргәлә генә йөрөй. "Әгәр Башҡортостанда Салауат Юлаевҡа ниндәйҙер рәсми мөнәсәбәт булһа, Эстонияла уға йылы, кешелекле мөнәсәбәт булыуы хайран итте. Олоһо ла, кесеһе лә уны белә, хатта батыр хаҡында һөйләгәндә күҙҙәренә йәш тула", - тип үҙенең фекерҙәре менән бүлеште Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, философия фәндәре кандидаты Азат Бердин. Артабан ул йыйынтыҡ менән ҡыҫҡаса таныштырып үтте һәм ғәҙеллек көрәшсеһе символы булған башҡорт батырына бағышланған семинарҙың Еңеүсе Георгий сиркәүендә уҙғарылыуы ла тәрән мәғәнәгә эйә булыуын белдерҙе.

Палдискиҙа заманында рус мәктәбендә ойоштороlған Салауат Юлаев музейы бер ваҡыт эшләүенән туҡтап, уның экспонаттары подвалға "ябылғайны". Әлеге ваҡытта музей экспонаттарының ҡала хакимиәтенең бер бүлмәһендә урын табыуы ла ҡыуанырлы күренеш. Ғәли Вәлиуллин әйтеүенсә, делегация мәрияға барып ингәндә, коридорға күргәҙмә итеп ҡуйылған экспонаттарҙы күреп, күңелдәрҙә Башҡортостандан Башҡортостанға барып төшкәндәй тойғолар кисерҙек, тине тулҡынланыуын һәм ғорурланыуын йәшермәйенсә һәм киләсәктә экспонаттарҙы айырым бинаға - ҡабат рус мәктәбенең бер класына күсереү мәсьәләһенә етди тотонасаҡтарын да белдерҙе. Ләкин был бер ойошманың йәки бер кешенең генә эше түгел, ә дәүләт, хөкүмәт кимәлендә һәм батырыбыҙҙың юбилейы йылында ғына түгел, даими, системалы алып барыла торған мәсьәлә.

Эйе, финанс көрсөгө, нисек кенә ауыр булмаһын, килә лә китә. Ә бына рухи көрсөктән сығыу, бәлки, мөмкин дә түгелдер. Әгәр ғәҙеллек һәм рух символы булған милли батырыбыҙҙы онотһаҡ, тарих беҙҙе ғәфү итмәҫ...

Шәрифә САЛАУАТОВА.

✓ *Сир әле яңы башланып ҡына торған осор һәм пациенттар бик күп түгел. Эпидемиологтар ҙа, инфекционистар ҙа ауырыусыларҙың июнь-август айҙарында күп булырын фаразлай.*

ИНТЕРНЕТТАН

ВИТАМИНЛЫ ТОМАТ

■ Томат һуты бик файҙалы икәнен беләһегеҙме? Бер стакан һутта каротиндың, С витаминының һәм организм өсөн башҡа кәрәкле матдәләрҙең тәүлек нормаһы бар. Тимер һәм фолий кислотаһы гемоглобиндың кимәлен күтәрә. Томат һутын һығып алғас, уға ҡатыҡ, әнис, петрушка, шәкәр, тәмһеҙ тоҙ өҫтәһәгеҙ, витаминлы эсемлек килеп сыға. Гипертонияны булдырмау өсөн көн һайын 1 ҡалаҡ бал өҫтәлгән томат һутын эсеү ҙә етә. Был эсемлек глаукоманан һаҡлай, ашҡаҙан һуты бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, йөрәк мускулдарын ҡан менән тәьмин итеүҙе яҡшырта. Ябығырға теләүселәр өсөн белгестәрҙән махсус салат рецебы: томат, алма, һуған, ҡаймаҡ, лимон киҫәге, тоҙ ҡушып болғатырға, көн һайын ашарға.

■ Британия ғалимдары мәғлүмәттәренә ярашлы, иртәнге зарядка ябығыуҙың эффектын 20 процентҡа күтәрә. Тик күнегеүҙәр ас ҡарынға башҡарылырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә 12 ир-егет ҡатнашҡан, уларҙың бер өлөшө спорт менән ас көйөнә, бер өлөшө иртәнге аштан һуң шөғөлләнгән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, иртән спорт менән шөғөлләнеүселәрҙең көн дауамында калориялы ризыҡ ашарға теләге булмай, улар асығып та бармай. Ә бына ас көйөнсә спортзалға йүнәлеүселәр уларға ҡарағанда 20 процентҡа калорияларҙы күберәк яндыра.

■ Бала ҡулдарының әүҙемлеге юғарыраҡ булған һайын уның фекерләү ҡеүәһе лә тиҙерәк үҫешә, ул яҡшыраҡ һөйләшә. Белгестәр шуға ла китапты баланың ҡулына иртәрәк тоторорға кәңәш итә. Ул уның биттәрен асырға маташҡанда ла, биттәрен һыйпап ҡарағанда ла ҡулдарға яҡшы массаж яһала. Шулай уҡ балалар китаптары тәҡдим итеүсе етештереүселәрҙең төрлө уйынсыҡ формаһында яһалған китаптарын да белгестәр юғары баһалай. Былар барыһы ла баланы киләсәктә китап уҡырға яратырға ла күнектерәсәк.

■ Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге буйынса Европа агентлығы ғалимдары асыҡлауынса, телевизорҙан рекламаланған төрлө йогурттарҙың кеше организмы өсөн бөтөнләй файҙаһы юҡ икән. Белгестәр 500 етештереүсенең тауарын тикшергәндә һуң, уларҙың 70 процентының рекламала әйтелгән мәғлүмәткә тап килмәүен билдәләгән. Әммә был яңылыҡ йогурттарҙы бөтөнләй ҡулланырға ярамай, тигәнде аңлатмай. Бары уларҙан ниндәйҙер дауалау эффекты көтмәгеҙ. Британия ғалимдары фекеренсә, көн һайын һөт йәки һөт аҙыҡтары ашаусылар гипертония менән һирәгерәк ауырый. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һөт аҙыҡтарында калий һәм кальций күп, улар артериаль баҫымды көйләү һәләтенә эйә.

■ Ас көйөнә мөһим ҡарар ҡабул итмәгеҙ, ти Макс Планка институты ғалимдары. Асығыу тойғоһо кешене уйланылмаған ҡабалан аҙымдарға этәреүе ихтимал. Баҡтиһәң, ашҡаҙан буш ваҡытта ҡарар ҡабул итеүгә баш мейеһенең бөтөнләй икенсе өлөшө яуап бирә икән. Ғалимдар емеш-еләк себенендә тәжрибә үткәреп ҡараған һәм уның ас ваҡытта хәүефкә барыу механизмы нисек эшләүен асыҡлаған. Ваҡ себендәр инстиктив рәүештә углекислы газдан ҡурҡа, әммә асыҡҡан мәлдәрендә улар газға ҡарамайынса аҙыҡҡа яҡынлаша. Ғалимдар фекеренсә, был нервы системаһының ике өлөшөнөң компромисы һөҙөмтәһе, бындай компромисҡа кешенең нервы системаһы ла һәләтле.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

Халыҡ телендә сысҡан биҙгәге тип йөрөтөлгән бөйөр синдромлы геморрагик биҙгәк (ГЛПС) бөгөн иң актуаль инфекцияларҙың береһе булып тора. Уның киң таралыуы, халыҡтың күпләп зарарланыуы, ауырыуҙың ауыр формала үтеүе йышайыуы һәм шул сәбәпле кешенең оҙайлы ваҡытҡа эшкә һәләте түбәнәйеүе, профилактикалау һәм дауалауҙың үҙенсәлекле саралары булмауы проблемаһы уны Рәсәйҙә юғары социаль һәм медицина әһәмиәтенә эйә сир тип баһаларға мәжбүр итә. Башҡортостан Республикаһы тиҫтә йылдар дауамында илдә юғары эпидемик хәл-торошло һәм көсөргәнешле сығанаҡ булып иҫәпләнә. Халыҡҡа ошо ауыр сир хаҡында ентекле мәғлүмәт еткереүен һорап, баш ҡаланың 4-се клиник инфекцион дауаханаһы бүлек мөдире, 1-се категориялы табип Фәгилә ҠОТЛОҒУЖИНАға мөрәжәғәт иттек.

ТӘБИҒӘТТӘ ХӘҮЕФ ТӘ БАР,

йәки сысҡан биҙгәге тураһында

- Ысынлап та, геморрагик биҙгәк республикала йыш осраған сир. Ул ҡайһы бер йылдарҙа күберәк, ҡайһы бер йылдарҙа әҙерәк теркәлә. Былтыр сирләүселәр тағы ла күбәйҙе: Өфөлә генә 3300-ҙән ашыу кеше дауаланһа, республика буйынса был һан 5 меңдән ашыу булды. Быйыл геморрагик биҙгәк иртәрәк - апрель аҙаҡтарынан теркәлә башланы һәм дауаханаға көн дә килеп торалар тиергә мөмкин. Сир әле яңы башланып ҡына торған осор һәм пациенттар бик күп түгел. Эпидемиологтар ҙа, инфекционистар ҙа ауырыусыларҙың июнь-август айҙарында күп булырын фаразлай.

Геморрагик биҙгәк - ул киҫкен сир. Уның төп сығанағы булып ҡыр һәм ялан сысҡандары йөрөткән вирустар тора. Вирустар сысҡандарҙың тиҙәге аша бүленеп сыға һәм тарала. Кеше ошо вирус бүлендектәре булған һауаны йәки һауа парҙарын, һауа саңын һулағанда, йәиһә сысҡанды тотҡанда, шулай уҡ сысҡандар бысратҡан аҙыҡ-түлекте, һыуҙы ҡулланғанда сир элэктереүе мөмкин. Шуға күрә был сир менән күберәген баҡсасылар, тәбиғәт шарттарында эшләүселәр: урмансылар, юлсылар, төҙөүселәр, нефтселәр, һунарсылар, балыҡсылар һәм сәхрәгә ял итергә сығыусылар ауырый. Күберәген 20-40 йәшлек ир-ат сирләй, сөнки улар ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда әүҙемерәк, һөнәрҙәре лә шуға бәйле, ял итергә, балыҡҡа, һунарға йөрөйҙәр. Балалар, бигерәк тә 5-6 йәшкә тиклемгеләр бик әҙ, йылына бер-ике осраҡ ҡына теркәлә. Өфө ҡалаһына яҡын булған Иглин, Кушнаренко, Бөрө, Благовещен, Нуриман, Ҡырмыҫҡалы, Архангел райондарында был сир йылдан-йыл арта. Эпидимиологтар быныҡ сәбәбен ошо территорияларҙа йүкә ағастары күп булыуына, ә сысҡандарҙың тап шуларҙың ҡайырыһы менән туҡланыуына бәйләй. Шуға ошо территорияла сысҡандар күберәк үрсей. Былтыр ҡышын бик ҡаты һыуытҡтар булманы, яҙғыһын һыу баҫыуҙар әҙ булды, көҙөн ямғырҙар әҙ яуҙы - был да кимереүселәрҙең артыуына килтерҙе. Тағы бында шуны билдәләп китергә кәрәк: сысҡандарҙың үҙҙәренең миграция процестары бар, бер ерҙә ағыулау эштәре үткәрелде икән, улар икенсе ергә күсенә һәм вирус йөрөткән булһалар, сир шулай тарала. Санэпидстанция хеҙмәткәрҙәре сысҡандарҙы ағыулау эшен ауырыуҙар күберәк асыҡланған райондарҙа алып бара. Шифахана-курорт участкалары, балалар лагерҙары, парктар, скверҙар территориялары, кеше күп йөрөгән урындар йыл да эшкәртелә. Теләүселәр шәхси рәүештә үҙҙәренең участкаларын да эшкәрттерә ала. Әйтергә кәрәк, өй сысҡандары сирләмәй, сөнки сирҙең сығанағы тәбиғәттә була. Әммә өй сысҡандары тәбиғәт шарттарына сығып йөрөһә, мәҫәлән, урман яҡын икән, ти, улар ҙа вирус йөрөтөүе мөмкин.

Геморрагик биҙгәк - хәүефле сир. Уның инкубация осоро өс аҙнаға тиклем дауам итә. Вирус организмда булған барлыҡ ҡан тамырҙарын зарарлай. Шуға күрә төрлө ҡан китеүҙәр, ҡан һауыу ҡурҡынысы бар. Әгәр кешенең баш мейеһенә, йәиһә бөйөрҙәр өҫтөндәге гормон биҙҙәренә ҡан һайһа, был ғүмергә хәүеф менән янай, һөҙөмтәлә үлем осрағы теркәлеүе лә мөмкин. Тағы ла төп зарарланған ағза - ул бөйөрҙәр. Сир эләккәндә бөйөрҙәр эшмәкәрлеге бик ныҡ боҙола һәм ҡайһы ваҡытта кире тергеҙелмәүе лә мөмкин. Бөйөр эшмәкәрлеге боҙолғандарҙы яһалма бөйөр аппараты (гемодиализ) булған дауаханаларға - 21-се ҡала дауаханаһы, Республика клиник дауаханаһына күсерәбеҙ. Бындай осраҡтар йыш булмаһа ла теркәлеп тора. Яһалма бөйөр аппараты бөйөрҙәрҙең эшмәкәрлеген тулыһынса тергеҙә. Был сир бик тиҙ үтмәй, һауығыу өс айҙан алып йыл ярымға тиклем бара. Шуға, дауахананан сыҡтым, хәлем яҡшырҙы, тип, артабан дауаланыуҙы ташлап ҡуйырға ярамай. Беҙ пациенттарға көсөргәнеш, диета, артабан нимә эшләргә икәнлеген аңлатып, күрһәтмәләр биреп сығарабыҙ. Сирле дауаланыуҙың беренсе этабын ғына беҙҙә үтә, артабан табип күрһәтмәләрен тулыһынса үҙ аллы үтәргә тейеш. Бигерәк тә физик көсөргәнеш ҡурҡыныс. Мәҫәлән, ярты йыл 5 килограмдан да артыҡ күтәрмәҫкә кәрәк, бейеү, спорт, гимнастика, аэробика, йөҙөү, ҡояшта ҡыҙыныу, төрлө шифахана-курорттарға барыу, самолетта осоу, поезда, машинала йөрөүҙе онотоп торорға тура киләсәк. Бигерәк тә беренсе өс айҙа хатта машинала йөрөү ҙә тыйыла, сөнки тамырҙар нығынып бөтмәгән була.

Сирҙең төп билдәләре булып тән температураһының ҡапыл 38-40 градуҫҡа тиклем юғары күтәрелеүе тора. Шунан ул бик әҙгә генә төшә лә, ҡабат күтәрелә. Тәүге 4-5 көндә кешенең тән температураһы юғары икән - был төп билдә. Температура юғары булғанда баш ныҡ ауырта, һөйәктәр, мускулдар һыҙлай, кешене бер өшөтә, бер ҡалтырата, сир ауырыраҡ үткән ваҡытта күҙ алдары томаланып тороуы, танауҙан, теш ҡаҙналарынан ҡан китеүе, ҡоҫоу, эс китеү ҙә мөмкин. 4-5 көн шулай үткәндән һуң, 6-7-се көн бөйөрҙәр насар эшләй башлай. Бәүел күләме ҡырҡа кәмей, был ваҡытта ла ҡоҫоуҙар була, көслө бил, эс ауыртыуҙары, эс китеүе күҙәтелә. Әгәр ошо билдәләр күҙәтелһә, мотлаҡ рәүештә тиҙ генә табипҡа күренергә кәрәк. Иң яҡшыһы - өйгә "Тиҙ ярҙам" йәки "Кисектергеһеҙ ярҙам" хеҙмәттәрен саҡыртыу. Ни өсөн тигәндә, аяғөҫтө йөрөү, физик көсөргәнеш, поликлиникала сират көтөү кешенең хәлен тағы ла ҡатмарлаштырыуы ихтимал. Шуға күрә табипты өйгә саҡыртыу яҡшы. Әгәр табипта геморрагик биҙгәк тигән шик тыуһа, беҙҙең дауаханаға дауаланырға ебәрәсәк. Беренсе өс көндә температуралары төшмәгән сирлеләр шунда уҡ табипҡа мөрәжәғәт итеп, дауаханаға иртәрәк килһә, уларҙың хәле лә яҡшыраҡ, һауығыуы ла тиҙерәк була, ауырыу эҙемтәһеҙ үтә.

Хәҙер телевизорҙан бик күп рекламалар бара, вирусҡа ҡаршы ла, температураны төшөрөргә лә дарыуҙар тәҡдим итәләр. Шундай осраҡтар бар, температураны төшөрәм, тип кешеләр күп итеп аспирин эсә, ләкин геморрагик биҙгәк сире ваҡытында аспирин ҡулланыу ҡәтғи тыйыла. Ғөмүмән, үҙ аллы дауаланыу менән шөғөлләнмәгеҙ, тиер инем. Әлеге ваҡытта сирҙән һаҡланыу вакцинаһы юҡ, Корея ғалимдары ниндәйҙер эштәр алып бара, әммә әлегә препарат уйлап табылмаған. Гемморагик биҙгәк вирусына бер ниндәй вирусҡа ҡаршы препарат та ҡаршы тора алмай. Был осраҡта ниндәй дарыу ҡабул итергә кәрәклеген мотлаҡ табип яҙырға тейеш. Вакцина булмағас, һаҡланыу кешенең үҙенән генә тора. Шуға күрә тәбиғәт шарттарында эшләүселәр танауҙарын, ауыҙҙарын битлек менән ҡапларға, ҡулдарына бирсәткә-бейәләй кейеп эшләргә тейеш. Бер тапҡыр ҡулланылған битлек-бирсәткәләрҙе йыуып, тағы ла файҙаланыу ҡәтғи тыйыла, сөнки вирус йыуғанға ғына бөтмәй. Ял итергә сыҡҡанда урынды асыҡлыҡтан һайларға кәрәк - асыҡ урында сысҡандар бик булмай, улар ҡыуаҡлыҡ, сүп-сар тирәһен төйәк итә, таҡта, бүрәнә, һалам, бесән өйөмдәре тирәһендә йөрөй. Яҙғыһын кешеләр баҡсаларына тәүге тапҡыр барғанда танау-ауыҙҙы битлек менән ҡаплап, баҡса йортон тулыһынса йыуырға, түшәк-ҡаралдыларын ҡояшта киптерергә, елләтергә, саңын ҡағырға, баҡса участкаһын сүп-сарҙан таҙартырға, сысҡан тейгән аҙыҡ-түлекте шунда уҡ ташларға тейеш.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.

✓ *Кемдеңдер етешһеҙлеген әйтеү ниәтенән кешенең дәрәжәһен төшөрөүҙән һаҡланығыҙ. Үҙегеҙгә ҡарата әйтелгән тәнҡит һүҙҙәрен тыныс ҡабул итергә өйрәнегеҙ.*

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

РАМАЗАН АЙЫ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!



17 июндә изге Рамазан айы башлана. Мосолмандар был көндө ураҙа тота башлаясаҡ. Ураҙаның төп маҡсаты: кешеләрҙең ғәмәлендә - изгелек, тәнендә - сәләмәтлек, күңелендә рухи камиллыҡ тәрбиәләү, тип аңлата дин. Ураҙа - тыйғандарҙан тыйыла белергә өйрәтеп, бәндәлә иман ныҡлығын арттырыу юлы ул.

Ураҙа тотоусыларға ҡайһы бер кәңәштәр:

• Был ваҡытта майлы һәм әсе аҙыҡ, кофе һәм газлы эсемлектәр ҡулланмағыҙ, сөнки был организмдың хәле насарайыуына килтерәсәк.

• Сәхәр ваҡытында артыҡ ашауҙан һәм эсеүҙән тыйылығыҙ. Һыу көн дауамында организмды тонуста тоторға яҙам итеүсе минераль тоҙҙарҙы йыуып сығара.

• Сәхәрҙә углеводтарға бай ашамлыҡ ашау көн дауамында асығыу тойғоһон кисермәҫкә булышлыҡ итәсәк. Мәҫәлән, финиктар шәкәр, клетчатка, углевод, калий һәм магнийға бай шәп сығанаҡ. Миндаль - майы әҙ булған протеин һәм сүс матдәләргә бай. Банан - калий, магний һәм углевод сығанағы.

• Ифтар һәм сәхәр араһында, организмда нормаль шыйыҡса кимәлен тотоу өсөн, күпләп һыу һәм һут эсегеҙ.

• Кофе ҡулланыуҙы кәметегеҙ, ә күберәген үлән һәм кофеины булмаған сәйҙәр эсегеҙ.

• Икмәк бешереү өсөн - көрпә һәм бәлештәр өсөн эре итеп тарттырылған он ҡулланығыҙ.

• Артыҡ күп ашамағыҙ, емеш-еләк һуты, ә иң яҡшыһы, таҙа һыу эсегеҙ.

• Майҙа ҡыҙҙырылған, майлы, әсе аҙыҡтан тыйылыу менән бер рәттән, эсәктәрҙә газ булдырыусы аҙыҡ-түлек ҡулланмағыҙ. Улар исемлегенә йомортҡа, кәбеҫтә, борсаҡ, газлы һыуҙар инә.

• Сәхәрҙе ҡалдырмағыҙ һәм составында шәкәр булған аҙыҡ-түлекте һәм эсемлектәрҙе ҡулланыуҙы сикләгеҙ. Шәкәргә бай аҙыҡ-түлек организмды күпләп инсулин бүлеп сығарыуға этәреп, ҡандағы глюкозаның кәмеүенә килтерә. Ә был иһә хәлһеҙлеккә, баш әйләнеүенә, иғтибарҙың кәмеүенә, баш ауыртыуына һәм йөрәк тибешенең шәбәйеүенә алып килә.

• Туҡланыуҙа еләк-емеш, ит, ҡош ите, балыҡ, һөт һәм бөртөклө аҙыҡтар булырға тейеш.

ЭТИКЕТ

ҠЫЛЫҠТАРЫҢА - ТӨҘӘТМӘ,

йәғни хеҙмәт мөнәсәбәттәре этикаһы тураһында

Кеше ғүмеренең күп ваҡытын эштә үткәрә. Көн һайын тиерлек осрашҡан, аралашҡан хеҙмәттәштәр менән үҙеңде нисек тоторға? Эш урынында ниндәй ҡағиҙәләр хаҡында онотмаҫҡа? Ошо хаҡта белер өсөн хеҙмәт мөнәсәбәттәре этикаһы ҡағиҙәләренә күҙ һалайыҡ.

• Тәү сиратта эш урынында ниндәй осраҡта ла, ниндәй хәл килеп тыуыуына ҡарамаҫтан, үҙегеҙҙе ҡулда тоторға тырышыу һәм әхлаҡи тәртип тураһында онотмау хеҙмәттәштәрегеҙ араһында абруйығыҙҙы бермә-бер арттырыр. Шулай уҡ тирә-яҡтағыларға йылмайыу һәм ихтирамлы ҡарашта булған осраҡта, улар ҙа һеҙгә ошондай уҡ мөнәсәбәттә буласаҡ. Үҙегеҙҙең дә, башҡаларҙың да кәйефен төшөрөлөк аҙымдар эшләүҙән тыйылығыҙ.

• Тәрбиәле ир-ат эш урынында ла ҡатын-ҡыҙға хөрмәтле булып ҡалыр, йәғни гүзәл зат алдында һүгенеү һүҙҙәре ҡулланыуҙан тыйылыр, мәғәнәһеҙ әңгәмә ҡормаҫ. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙға ишек асып сығарыу һәм башҡа ошондай ваҡ, әммә мөһим ҡағиҙәләр тураһында ла онотмаҫ әҙәпле ир-егет. Ләкин әҙәплелек эш барышына ҡамасауламаҫҡа тейеш. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙ ҡайҙалыр сығырға иҫәп тотоп кейенә башлаһа, ир-атҡа был осраҡта урынынан тороу кәрәкмәй, ләкин гардеробта бергә тура килгәндә был йәһәттән ярҙам итеп ебәреү матур күренеш буласаҡ.

• Ҡатын-ҡыҙ эш урынында ла, башҡа ерҙәге кеүек үк, иғтибарға лайыҡ булһа ла, уға үҙенең гүзәл зат булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, бындай иғтибар менән артыҡ файҙаланыу кәрәкмәҫ. Айырыуса ниндәйҙер мәсьәләне күҙ йәштәре аша хәл итергә, ир-ат хеҙмәттәшегеҙҙе енергә тырышыу урынһыҙ һәм йәмһеҙ икәнлеген онотмағыҙ.

• Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙға эш өҫтәлен төрлө биҙәнеү кәрәк-яраҡы, көҙгө, эшләпә кеүек баш кейемдәре һәм башҡа ваҡ-төйәк әйберҙәр менән тултырыуҙан да ҡасырға кәрәк. Быныҡ өсөн кеше күҙе күрмәгән икенсе урын һайлау мөһим.

• Эш телефонына килгән шылтыратыуға яуап бирергә тура килгәндә, ныҡышмалы рәүештә шылтыратыусының кем булыуын һорашмағыҙ. Шәхси мәсьәләләр менән эш телефонын оҙаҡ тотоу - әҙәпһеҙлек. Әгәр ҙә эш телефоны менән ҡулланырға тура килһә, йомошоғоҙҙо тиҙ һәм хеҙмәттәштәрегеҙгә ҡамасауламаҫлыҡ тауыш менән генә хәл итергә тырышығыҙ.

• Күп кенә ойошмаларҙа хеҙмәткәрҙәрҙең тыуған көнөн билдәләү йолаһы бар. Эш урынында ҙурлап байрам үткәреү, өҫтәл тултырып һый әҙерләү килешмәй, шуға күрә был ваҡиғаны артыҡ ҡуйыртмай, сәскә гөлләмәһе тапшырып, бәләкәй генә сәй табыны артында билдәләп үтеү урынлы булыр.

• Етәксенең кабинетына ингәндә, әгәр ҙә ул үҙе ошондай талап ҡуймаһа, ишек шаҡып тороу кәрәкмәй.

• Эш урынында барған йыйылыш, оперативка һәм кәңәшмәләрҙә эргәңдәге кеше менән һөйләшеү, нимәлер ашап ултырыу, иҫнәү кеүек ғәҙәттәрҙән тыйылыу кәрәк.

• Бер коллектив та тиерлек аҫтыртын этлек ҡылыуҙан, ғәйбәттән азат түгел. Мәҙәниәтле кеше бер ҡасан да башҡаларҙың ғаилә хәле, эш хаҡы, балалары, йорттарында булырға тура килһә, ундағы шарттар тураһында һөйләмәй.

• Хеҙмәттәшегеҙҙең кейеме, прическаһы, ҡылыҡтары тураһында һәр ваҡыт үҙ фекерегеҙҙе белдерергә тырышып тормағыҙ. Әгәр ҙә heҙҙән ошо йәһәттән ниндәйҙер кәңәш һорайҙар икән, ул осраҡта үҙ фекерегеҙҙе әйтергә мөмкинһегеҙ. Төрлө иҫкәрмәләр эшләү, ныҡышмалы һорауҙар биреү, кешенең йөҙ-ҡиәфәтен икенсе кешеләр менән тикшереү әҙәпһеҙлек билдәһе.

• Эш урынында башҡаларға ҡамасауларға мөмкин булған ғәҙәттәрҙән тыйылып тороу кәрәк. Мәҫәлән, тартҡан кеше тәмәкеһенең еҫе бер кабинетта ултырыусыларға тәьҫир итмәҫлек саралар күрергә бурыслы. Ҡайһы берәүҙәр һыуыҡ тейеүҙән һаҡланыу маҡсатында эш өҫтәлендә һарымһаҡ йәки башҡа төрлө көслө еҫле үлән-емеш ҡуллана. Профилактиканың бындай төрөн ҡулланыусы был еҫтәр башҡаларға ҡамасауламаҫлыҡ итеү яйын табырға тейеш. Әгәр ҙә инде еҫте "йәшереү" ысулын тапмаһа, бындай ғәҙәттән баш тартыу хеҙмәттәштәр араһындағы аңлашылмаусанлыҡтан һаҡлар.

• Ҡайһы бер коллективта таҙалыҡ менән артыҡ мауыҡҡан йәки, киреһенсә, быға артыҡ иғтибар итмәгән кешеләр ҙә була. Тәүгеләре һәр ваҡыт нимәлер һөртә, таҙарта, үҙенең битен, ҡулын йыуа, хатта ҡолаҡтарын таҙартыуға тиклем барып етә. Икенселәре иһә йыуыныу бүлмәһенә бик һирәк инеүселәр. Ике төркөмгә ингән кешеләр ҙә хеҙмәттәштәре өсөн берҙәй ҡыйынлыҡ тыуҙыра, шуға күрә сиктәрҙе уҙмаҫҡа тырышығыҙ.

